ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 июнь (һөтай) 2021

№23 (961)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Иғтибар! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә 07 июндән 17 июнгә тиклем ташламалы хаҡ менән - 619 һум 08 тингә яҙылырға мөмкин буласаҡ. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.***

***Мөхәрририәт.***

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һаҡ булығыҙ: самокат елә!**



2-3

**Сағыштырыуҙарҙа тыуа хәҡиҡәт тә…**



**йәшәйеш аҡылы ла, матур мөнәсәбәттәр ҙә** 8-9

**XXI быуат яҙыусыһы.**

Кем ул, нимә яҙа?



10

**Ҡунаҡ ашы - ҡара-ҡаршы**



12-13

**ТВ-программа** 14

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Бөгөн йәштәргә ниндәй тәрбиә бирелә? Пионер, комсомол тәрбиәһе үткән быуын ошо хаҡта ниҙәр уйлай?*

***Тимер НИӘТШИН, шағир, публицист, йәмәғәт эшмәкәре:*** Совет осоро тәрбиәһе алған быуын булараҡ, шуны әйтәм: ул заман балалары, йәштәре менән бөгөнгө йәш быуын араһында айырма - ер менән күк араһы. Әлбиттә, заман башҡа - заң башҡа, тип дөрөҫ әйтелә; аң, белем, интеллект кимәле бер урында ғына тормай инде ул. Бөгөнгө йәштәрҙең дөйөм белем кимәленә баһа бирә алмайым, ләкин улар мәғлүмәт технологияһында бик алға китте, ә бына тәрбиә яғынан шулай ҙа эштәр маҡтанырлыҡ түгел, тип уйлайым. Гаджеттарҙы яҡшы белеү генә әле белем тураһында һөйләмәй, ул ғына ла түгел, тәрбиәһеҙлеккә лә тап ана шул заманса технологиялар сәбәпсе булып сыға йыш ҡына. Элек беҙҙе пионерия сафында тырышып уҡырға, тәртипле булырға, өлкәндәргә ярҙам итергә, уларға ҡарата кеселекле булырға, "Бирәү - бөтәһе, бөтәһе - берәү өсөн" тигән девиз менән йәшәргә, коллективлыҡҡа өйрәтһәләр, бөгөн үҫмерҙәрҙең күбеһе көнө-төнө ана шул гаджеттарға текәлеп, виртуаль донъяла йәшәй. Улар ваҡыттарын күбеһенсә япа-яңғыҙлыҡта үткәрә, хатта ата-әсәһе менән аралашырға ла "ваҡыттары юҡ". Ҡыҫҡаһы, уларға таныш булмаған, ят, хатта ҡайһы саҡ хәүефле донъя - интернет селтәре йоғонто яһай, "тәрбиә"не ул алыштыра. Бөгөн телдән төшмәгән Ҡаҙан фажиғәһе ана шуның касафаты булды ла инде. Унан һуң был егет - Ғәләүиев ғаилә тәрбиәһе лә күрмәгән, ә мәктәп йоғонтоһо уға фәҡәт дошманлыҡ тойғолары ғына уятҡан, сөнки унда ул уҡытыусылар, йәштәштәре тарафынан гел кәмһетелеүҙәргә, ситкә тибәреүҙәргә дусар ителгән, тип тә яҙҙылар. Бындай хәлдәр һәр уҡыу учреждениеһында ла бар, сөнки мәктәптең балалар тәрбиәләргә ваҡыты ла, аныҡ ҡына күрһәтмәләре йә программаһы ла юҡ.

Беҙҙе үҫкән саҡта туған илебеҙҙе һөйөргә, хеҙмәт яратырға, берҙәмлеккә, намыҫлы булырға өйрәттеләр. Кеше - кешегә дуҫ, иптәш һәм туған, тип инанып үҫтек. Коммунизм төҙөмәнек, әлбиттә, был утопия ине, уның ҡарауы, тәртипле, эшсән, рухи ҡиммәттәрҙе баһалай белгән патриоттар үҫеп сыҡты ул йылдарҙа. Дөрөҫөн әйткәндә, ул замандарҙа тәрбиә эшенә ғаиләнән бигерәк мәктәп күп көс һала ине. Ә бөгөн - киреһенсә, сөнки тәрбиә эшенә нигеҙләнер милли идея, йүнәлеш юҡ. Был йәһәттән республикабыҙҙа халыҡ педагогикаһына нигеҙләнеп эшләнгән "Тормош һабаҡтары" дәрестәрен, туған тел уҡытыуҙы ғәфү иткеһеҙ сәбәптәр менән төп уҡыу программаһынан алып, барыбер халыҡ тәрбиәһенә аяҡ сала алмаҫтар, тип ышанам. Халҡыбыҙ балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең ерле милли йолаларыбыҙ һәм традицияларыбыҙҙа тәрбиәләүҙе дауам итә, бар шундай матур, зирәк аҡыллы ғаиләләр, тик улар тағы ла күберәк булһын ине.

## ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# АУЫЛ СПОРТЫ ДОНЪЯ ИҢЛӘЙ

**Бөрйән районының Әбделмәмбәт, халыҡса әйткәндә, Ҡыпсаҡ ауылы спортсылары тураһында республикала ғына түгел, ил кимәлендә лә йыш ишетеп торабыҙ. Уларҙың еңеүҙәре май айында ғына ла бер-нисәү булып китте.**

**(Дауамы 2-се биттә).**




12+

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# АУЫЛ СПОРТЫ ДОНЪЯ ИҢЛӘЙ

(Башы 1-се биттә).

Мәҫәлән, әле күптән түгел генә Курск ҡалаһында уҡыусылар араһында уҙған физкультура-олимпиадаһында Батырша Боҫконов ҡатнашҡан. Уға тиклем был егет республика кимәлендәге олимпиадала ла призер булған. Күптән түгел генә грэпплинг буйынса Башҡортостан кубогына уҙғарылған көс һынашыуҙа Гүзәл Сәйфетдинова беренселек яулаған. Унда ҡатнашҡан Илсиә Әхмәтова менән Батырйән Хурманшин да уңышлы сығыш яһаған. Санкт-Петербург ҡалаһында уҙған Рәсәй чемпионатында панкратион буйынса көсөн һынап ҡараған Иштуған Шәмиғолов та һынатмаған һәм ошо көндәрҙә, йәғни 22 майҙа ғына ул Ҡаҙан ҡалаһындағы Халыҡ-ара турнирҙа грэпплинг көрәш төрө буйынса 4-се урынға сыҡҡан. Ошо уҡ айҙа гер күтәреү буйынса республика беренселегендә район командаһында сығыш яһаған Әбделмәмбәт ҡыҙҙары гел призлы урындарҙы яулай. Шулай уҡ еңел атлетика буйынса уҙған район кимәлендәге ярышта ла был ауыл балалары абруйлы икенсе урынды эләктереп ҡайта.

- Беҙҙең ауыл халҡы борон-борондан рухлы, көрәшсе, яугир булыуы менән дан тотҡан. Ошо тәбиғи үҙенсәлектәре уларға спорт уйындарында ла яҡшы булышлыҡ итә. Мәктәп уҡыусылары электән дә спортта көслө булды һәм бөгөн беҙҙә тотош ауыл сәләмәтлек яҡлы, - тип һөйләй Әбделмәмбәт мәктәбенең данлыҡлы физкультура уҡытыусыһы Зиннур Ғүмәр улы Боҫҡонов. - Йәштәрҙе аҙнаһына өс тапҡыр тренерыбыҙ Абдулҡадир Нурғәлин Белорет ҡалаһынан килеп шөғөлләндерә. Ул Иҫке Собханғол һәм Әбделмәмбәт ауылдарындағы "Яугир" көрәш үҙәге етәксеһе лә. Унан тыш, үҙебеҙҙәге Нур Усманов менән Иштуған Шәмиғолов быға тиклем дә эш алып барҙы һәм әле лә бик әүҙемдәр. Стадиондың, спорт залының бер генә көн буш торғаны ла юҡ. Ҡыш буйына саңғысыларҙың төп командаһында ғына 25 бала туктауһыҙ зона һәм республика бәйгеләрендә призлы урындарҙы яулап килде. Ҡиммәтле спорт кейемдәрен дә, саңғыларҙы ла уларға ата-әсәләре алды, балаларҙы бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ йөрөттөк, ярыштарға әҙерләнек. Халыҡ шундай аңлы, алдынғы ҡарашлы беҙҙә...

Әбделмәмбәт ауылында йәштәр генә түгел, 60-70 йәшлек саңғысылар ҙа, йүгереүселәр ҙә, гер күтәреүселәр ҙә бар икән. Бында иртәле-кисле йүгереп йөрөүселәр, башҡа спорт төрҙәрендә күнекмәләр үтеүселәр берәүҙе лә аптыратмай. Бәләкәйҙәр - йәштәрҙән, йәштәр ололарҙан үрнәк алып йәшәйҙәр шулай.

- Республика Башлығы беҙҙең спортсы ауылға иркен спорт залы вәғәҙә иткәйне, шуны сабырлыҡ менән көтәбеҙ, булырына ышанабыҙ һәм ул ваҡытта тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшербеҙ, көслө спортсылар тәрбиәләп сығарырбыҙ, - тип тамамлай һүҙен Зиннур Боҫконов. Әлеге ваҡытта улар Волга буйы федераль округының (ПФО) Рәсәй ярыштарына әҙерләнә. Уңыштар теләп ҡалабыҙ Бөрйәндең батыр ул-ҡыҙҙарына!

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ: САМОКАТ ЕЛӘ!

**Һуңғы йылдарҙа юлдарҙағы автоһәләкәттәрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Ҡайҙалыр йәнтәслим ашығыусы машиналар маңлайға-маңлай төкөшөүҙән, әҙәм балаларын бәрҙереүҙән, тиҙлек яратыусы дыуамал йә иҫерек водителдәр ҡылығынан меңәрләгән ҡорбандар, тупаҫ итеп әйткәндә, себен ише ҡырыла ғына.**

Көндәлек яңылыҡтар сығарылыштарында был турала хәбәр ителмәгән көн һирәктәр. Һәләкәт сәбәптәре, юл хәрәкәте ҡатнашсыларының әҙәп кимәле, хаяһыҙлыҡ, үҙенән башҡаны бар тип тә белмәү, эскән килеш машина йөрөтөү осраҡтары хаҡында күп яҙғаныбыҙ бар. Икенсе яҡтан, әҙәм файҙаланыуында машина һанының да бермә-бер артыуы күҙәтелә. Рәсәй буйынса шәхси ҡулланылышта бөтәһе 45 млн машина булһа, Башҡортостан илдәге тәүге тиҫтә лидерҙар иҫәбендә - республикала йөмғеһе 1,29 млн еңел автомашина бар, ә бына Өфөлә мең кешегә 500 машина тура килә. Шунан самалап ҡарағыҙ инде баш ҡалалағы бындай хәрәкәт тығыҙлығының ниндәй хәүеф һәм көсөргәнеш тыуҙырыуын.

Шул ғына етмәгәйне, әллә ҡайҙан яңы төр юл йөрөү саралары - электр самокаттары, моноцикл, гироскутерҙар пәйҙә булды. Еңел машина ғына түгел, хәҙер улар ҙа Өфө урамдарын - төп транспорт юлын, тротуарҙарҙы баҫып алды һәм шунда уҡ улар ҡатнашлығында юл-транспорт проблемалары башланды: юл фажиғәләре, ҡорбандар һаны артты. Бер үк ваҡытта самокатта йөрөүселәр ҙә арта бара һәм, тәбиғи, улар ҡатнашлығында юл ҡағыҙәләрен боҙоуҙар ҙа күбәйҙе. Күп уйлап та тормаҫтан, улар ҡаланың төп транспорт юлына төшөп китә һәм көтмәгәндә боролоштарҙан килеп сығып, авария сәбәпсеһе була, ҙур тиҙлек менән машиналарға бәрелә. Үлемесле хәүеф тыуҙырыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡайһы бер самокатсылар машина юлдарында уҙышыуҙы уйын күреп алды: йәнәһе, кем алдараҡ, кем тиҙерәк! Етмәһә, эскән килеш елдереүҙән дә тартынмайҙар. Мәҫәлән, үткән шәмбе көндәренең береһендә ЮХХДИ хеҙмәткәре иртәнге сәғәт алтыла Өфө урамынан елдереүсе 30 йәшлек иҫерек ҡатынды туктата. Юл ҡағиҙәһен боҙоусы административ язаға тарттырыла һәм штраф түләтелә.

Электр самокатында йөрөүселәр машина юлдарында ғына түгел, йәйәүлеләр өсөн дә ҙур хәүеф тыуҙыра. Ҡариҙел буйындағы дамба тротуарынан шәп тиҙлектә килгән само-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Бөгөн йәштәргә ниндәй тәрбиә бирелә? Пионер, комсомол тәрбиәһе үткән быуын ошо хаҡта ниҙәр уйлай?

*Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, журналист, педагог:* Бөгөнгө ҡапма-ҡаршылыҡлы мәғлүмәттәр менән тулған, рухи ҡиммәттәр осһоҙлана барған боларынҡы заманда йәш быуынды быуаттар һынауын үткән милли традицияларҙа тәрбиәләүҙә халыҡ педагогикаһын киң ҡулланыу ғәмәлгә ярашлы. Мин шулай тип ҡабатлауҙан туктамайым: халҡыбыҙ педагогикаһының төп нигеҙҙәре, алтын аҫҡысы "Урал батыр" эпосында һалынған, шуға ла ата-әсәләрҙе, бигерәк тә йәш ғаилә башлыҡтарын бөйөк эпосыбыҙҙы тәрәнерәк өйрәнергә саҡырам.

Әсә теленән дә ышаныслы тәрбиәсе юҡ. Туған телдә шәхсән үҙендең генә әйтһә һүҙен түгел, быуындан-быуынға, нәҫелдән-нәҫелгә күсә килгән ҡиммәттәр сағылыш таба. Ошо ҡиммәттәр тел моңона үрелеп, бала күңеленә һеңә һәм ҡан (ген) менән бирелә килгән милли хазинаны - үҙанды уята. Үҙаң уяныуы - тәрбиәнең иң ышаныслы терәге, таянысы, нигеҙе. Өфөлә йыш ҡына күҙәткәнем бар: ҡайһы бер йәш ата-әсәләр балалары менән урамда башҡортса һөйләшергә, "әсәй" тип башҡортса әйтерергә ояла. Бала "әсәй" тип әйтергә оялдымы - тимәк, ул артабан башҡортса һөйләшергә ояласаҡ. Милләтебеҙҙең үҙҙән кәмһетеүе ошонан башлана түгелме? Үҙҙән, тимәк, халҡын, тимәк, халыҡҡа ҡағылған бөтөн нәмәне лә инҡар итеү тәү ҡарашҡа ябай ғына күренгән "әсәй" тип әйттерергә оялыуҙан башлана бит. Ата-әсәһен хөрмәт итмәгән кеше улар менән туған телдә аралашмай, халҡын хөрмәт итмәгән кеше балаһына туған телен өйрәтмәй. Баланы туған мөхит - туған тел, халҡының тарихы, ижады, йыр-моңо, гөрөф-ғәҙәте, йолалары кеше итеп тәрбиәләй. Туған мөхиттән айырыу - үҙ балаңды ҡулыныңдан алып, сит ҡатын итәгенә йәки ят арбаға ултыртыу менән бер. Бөгөнгө көндә әсә телебеҙҙе уҡытыуҙағы проблемалар, уҡытыусылар ҙа, балалар ҙа нисә йыл яратып өйрәнгән "Тормош һабаҡтары" дәрестәренең төп уҡыу программаһынан алыныуы кеүек күренештәр йәш быуынды илһөйәр һәм телһөйәрҙәр итеп тәрбиәләү файҙаһына һөйләмәй, әлбиттә. Шуға ҡарамаҫтан, күпселек зыялы уҡытыусылырыбыҙ "Тормош һабаҡтары"нан айырмай балаларҙы, дәреслектәрҙе кластан, уҡыуҙан тыш сараларҙа киң ҡуллана. Был дәреслектәр өсөн әле булһа тик рәхмәт һүҙҙәре генә ишетәм. "Тормош һабаҡтары" дәреслектәрен китап магазиндарынан да, хатта китапханаларҙан да эҙләп тә таба алмай, миңә мөрәжәғәт итеүселәр бик күп. Белеүегеҙсә, "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге булышлығында "Урал батыр" эпосы нигеҙендә "Урал батыр мәктәбе" ғәмәлгә ашырылды. Был проект Башҡортостан Башлығы грантына лайыҡ булғайны. Әлеге көндә беҙ Youtube каналда ошо мәктәп дәрестәрен үткәрәбеҙ. Шуныһы шатлыҡлы: был тәрбиә мәктәбе эшен республика уҡытыусылары дәррәү күтәреп алды һәм уға ихлас ҡушылды. Ҡыҙыҡһыныусылар ошо каналға инеп, халыҡ тәрбиәһе һабаҡтары биреүсе ошо дәрестәрҙә ҡарай һәм унда ҡатнаша ала.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Саҡмағош районы Иҫке Бәшир ауылында 2020 йылда COVID-19 эҙемтәләренән ваҡытһыҙ арабыҙҙан киткән Өфө мэры Өлфәт Мостафин иҫтәлегенә мемориаль таҡтаташ асыу тантанаһы уҙҙы. Советтар Союзы Геройы Ғабдрахман Латипов исемендәге урта мәктәпкә иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылды. Сарала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Саҡмағош районы башлығы Реканс Ямалиев, шулай уҡ Өлфәт Мостафиндың әсәһе Миләүшә Мөхәмәтшәрип ҡыҙы ла ҡатнашты.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәсетле районы Яңы Мөслим ауылында булды. 29 майҙа унда кешеләр ултырған ат арбаһына еңел автомобиль килеп бәрелгән. Юл фажиғәһендә биш кеше имгәнгән, 65 йәшлек ҡатындың тубыктан аяғын ҡырҡырға тура килгән. Республика етәксеһе халыҡ менән осрашты һәм уларға төрлө ярҙам күрһәтергә, ауылда яңы клуб төҙөләшө башланасағын вәғәҙә итте.

✓Башҡортостандың Күгәрсен районы Мәксүт ауылында Хәбибуллиндар ғаиләһе 135 умартаһын юғалтҡан. Хәбәр итеүҙәренсә, умартасылар умарталарҙы урманға ла, яланға ла сығара алмай, сөнки биләмәләрҙе инсектицидтар, пестицидтар һәм гербицидтар менән эшкәртәләр. Был сара ебәк күбәләгененең таралыуына бәйле. Тап шул сәбәпле республиканың биш районында ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелгән. Умартасыларҙы ошо сара тураһында иҫкәрткәндәр һәм умарталыҡты үҙҙәренең участкаһында ҡалдырырға кәңәш биргәндәр.

✓Башҡортостандың Йәмәғәт палатаһы рәйесе Ростислав Мырҙағолов отставкаһын ҡабул итеүҙәрен һорап ғариза яҙған. Йәмәғәт палатаһында ошондай ғаризаның булыуы тураһында мәғлүмәтте раҫланылар. "Ростислав Мырҙағолов палата ултырышын йыйыуҙы һораны, - тип хәбәр иттеләр матбуғат хеҙмәтенән. - Йәмәғәт палатаһы ағзалары уның рәйес вазифаһын ҡалдырыуы хаҡында ғаризаһы буйынса ултырыш үткәрә".

✓Башҡортостанда электрон ваҡиғалар календары әҙерләнә. 31 майға мәғлүмәттәр буйынса, унда республиканың 48 районынан 218 сара теркәлгән. 2021 йылдың 24-26 июнендә Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы барышында Travel blogger Бөтә Рәсәй конференцияһы, "Ҡымыҙфест", Милли аш-һыу фестивалдәре була. Бынан тыш, календарҙа "Самрау" халыҡ-ара һауала йөҙөү фестивале лә бар. Ул 2021 йылдың 19-26 июлендә ойошторола.

✓ ***Хәрәкәт маршрутын түгел, самокаттарҙың тиҙлеген сикләү сараһын күрергә тәҡдим итә депутаттар. Ысынлап та юл хәрәкәте ҡатнашсыларынан тиҙлекте сикләүҙе талап итеү бик күп ғүмерҙәрҙе һаҡлап ҡалыр ине.***





катсы үҫмер малайҙы бәреп йыға. Һөҙөмтәлә зыян күреүсенең ҡулы, юл ҡырына бәрелеп, өс теше һына, мейеһе һелкенә. "Йәйәүлеләр өсөн һалынған был тротуарҙан өлкәндәр ҙә, коляскалы йәш әсәйҙәр ҙә, бала-саға ла рәхәтләнеп йәйәү йөрөй инек. Ҡаршыңа йә арттан килгән самокаттарҙан тайпылып өлгөрөп булмай, бик ҡурҡыныс. Шуға беҙ хәҙер ғаиләм менән унда сығып йөрөүҙе туҡтатырға мәжбүр булдыҡ. Йәл, ә яҡында ял өсөн башҡа ундай уңайлы, матур урындар юҡ", - тип һөйләй Сипайлово биҫтәһендә йәшәүсе ҡатын. Баш ҡаланың Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре юл ҡағиҙәләрен боҙоусы самокатсыларға ҡаршы аяуһыҙ көрәш башланы. "Электр самокаты" тигән махсус операция ойошторолоп, баш ҡалабыҙҙың Ленин, Зәки Вәлиди, Революцион, Мостай Кәрим урамдары, Октябрь проспекты, Ағиҙел яры буйында рейдтарға сыҡтылар. Әйткәндәй, рейдтың тәүге көнөндә генә лә самокатсылар тарафынан 13 юл ҡағиҙәһен боҙоу осрағы теркәлгән, ғәйеплеләрҙән 500-әр һум күләмендә штраф түләтелгән. Дөрөҫ, бындай административ яза йәйәүлеләр өсөн ҡаралған. Ә бына самокаттарҙың (моноцикл, гироскутер һ.б.), яңы төр хәрәкәт итеү сараһы булараҡ, айырым статусы юҡ, шуға күрә улар менән идара итеүселәр йәйәүле булараҡ ҡарала. "Өфөлә был йәһәттән ысын мәғәнәһендә вакханалия башланды. Самокаттарҙы прокатҡа биреүселәр ҙә ҡайҙа теләй, шунда шөғөлдәрен ҡороп ебәрә, тротуарҙарҙы баҫып ала, самокатсылар иһә йәйәүлеләр араһына барып инә һәм уларға ғына түгел, үҙҙәре өсөн дә ҙур хәүеф тыуҙыра", - ти республика парламенты спикеры Константин Толкачев. Ҡоролтайҙа депутаттар, юристар, эксперттар ҡатнашлығында булып үткән кәңәшмәлә ошо проблема тураһында һүҙ барған, ләкин самокатсылар хәрәкәтен көйләү буйынса аныҡ ҡына ҡарарға киленмәгән әле. Самокаттарҙа йөрөү өсөн айырым урындар булдырып, уларҙың хәрәкәт итеү биләмәһен сикләү ҙә дөрөҫ түгел, ти улар ошо хаҡтағы тәҡдимде тикшереп, сөнки хәҙер самокаттарҙа эшкә йөрөүселәр ҙә бар. Уларҙың урамдар буйлап хәрәкәтен тыйыу заманса һәм экологик зыянһыҙ индивидуаль транспорт төрөн юҡҡа сығарыуы бар. Шуға күрә хәрәкәт маршрутын түгел, самокаттарҙың тиҙлеген сикләү сараһын күрергә тәҡдим итә депутаттар. Ысынлап та, халыҡ-ара тикшеренеүҙәр һығымтаһында әйтелеүенсә, юл хәрәкәте ҡатнашсыларынан тиҙлекте сикләүҙе талап итеү бик күп ғүмерҙәрҙе һаҡлап ҡалыр ине. Мәҫәлән, сәғәтенә 50 км тиҙлек менән килгән машина бәрҙереүенең ни бары 20 проценты, ә 80 км тиҙлектәгеһенең 60 проценты һәләкәт менән тамамлана. Шул уҡ ваҡытта йәш буйынса сикләүҙе лә онотторға ярамай, бәләкәй балаларға электр самокаттарҙа йөрөүҙе тыйыу кәрәк. Был мәсьәләне тикшереү һуңында эксперттар Өфөләге велосипед юлдарын самокаттар өсөн дә файҙаланыу мөмкинлеген ҡарарға тәҡдим итте. Был сара байтаҡ ресурстар талап итһә лә, ғәмәлдәге федераль программалар ярҙамында эште хәҙерҙән үк башларға кәрәк, тине спикер. Ә әлегә - яңы транспорт сараһы өсөн юл хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләре законда нығытылып, юлдар һалынғансы - һаҡ булығыҙ: самокат еләә!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Бөгөн йәштәргә ниндәй тәрбиә бирелә? Пионер, комсомол тәрбиәһе үткән быуын ошо хаҡта ниҙәр уйлай?

***Лена ХӘЙРУЛЛИНА, журналист, Мәләүез ҡалаһы:*** Бына әле Ҡаҙан фажиғәһе ҡабат-ҡабат күҙ алдына килеп баҫа. Әлбиттә, был хәлгә ҡарата бик күп фекерҙәр ишетергә тура килә. Кемдер егеттең ҡанһыҙлығын, уға тейешле тәрбиә бирә алмаған ата-әсәһен, заманса гаджеттарҙы, көн-төн һуғыш, көс ҡулланыу, үлтереш күрһәткән телевидениены, кемдер хатта мәктәп һаҡсыһын, ҡорал һатып алыуға рөхсәт биргән табипты ғәйепләй. Был фекерҙәрҙең барыһын да иҫәпкә алырға, улар менән килешергә була. Был ҡот осҡос хәл тураһында бер өлкән класс уҡыусыһы менән һөйләшергә тура килгәйне. Ул иһә бөтөн бәләлә 19 йәшлек егетте лә, уның ата-әсәһен дә, һаҡсыны ла түгел, ә енәйәтсенең уҡытыусыларын ғәйепләй. Уның: "Некоторые учителя сильно унижают детей",- тип әрнеп әйткән һүҙҙәрен ишетеү еңелдән булманы. Йәш быуынға белем, тәрбиә биргән, ал-ял белмәй эшләгән уҡытыусыларҙы яҡлап сыҡмаҡсы булдым да, ирекһеҙҙән, тыйылып ҡалдым, сөнки үҙемдең дә бер мәлгә генә ошо уй башымдан йүгереп үткәйне. Әлеге уҡытыусылар тәртибенә зарланған баланың фекере менән, бер яҡтан, килешергә лә булалыр, тигән фекер ҡалҡып сыҡты тағы ла. Юҡ, ниндәй генә сәбәптәр булмаһын, бер ғәйепһеҙ балаларға, был мәктәптә ни бары икенсе йыл ғына эшләүсе йәш уҡытыусыға ут асҡан енәйәтсене аҡларға ла, яҡларға ла йыйынмайым, мине дөрөҫ аңлаһындар ине. Аллаһы Тәғәлә хөкөмдар бында, ә мин түгел.

Эш бына ниҙә. Беҙ барыбыҙ ҙа мәктәптәрҙә, башҡа уҡыу йорттарында уҡыған кешеләрбеҙ. Мин дә уҡыным. Уҡытыусыларҙың да төрлөһөн - яҡшыһын да, насарын да күрҙем. Улар араһында уҡыусыларҙан көлөп, уларҙы төрлөсә түбәнһетергә тырышып торғандары ла булманы түгел, булды. Ә бит бала күңеле үтә нескә һәм һиҙгер икәнен онота ҡайһы бер педагогтар. Үҙен яҡларлыҡ шәхес булып формалашҡансы, уға байтаҡ ваҡыт талап ителгәнен дә иҫтән сығаралар, күрәһең. Ата-әсәһе эскән ғаиләлә үҫкәндәрҙе "эскесе балаһы", насар уҡығандарҙы "наҙан", ситтән күсеп килгәндәрҙе "килмешәк" тигән мыҫҡыллауҙарҙың да шаһиты булырға, ишетергә, күрергә тура килде. Был ҡушаматтарҙың береһе лә үҙемә ҡағылманы ҡағылыуын, әммә түбәнһетелгән балалар өсөн бик ҡыйын ине. Юғиһә бит, беҙ уҡытыусыларҙы идеаллаштырып, Аллаһ урынына күрә инек, тик үкенескә, уларҙың ҡайһы берҙәренең шундай насар ҡылыҡтары аңлашылып етмәй ине. Хәҙерге аҡыл менән ундай уҡытыусының тәрбиәһеҙ, кешелекһеҙ холҡо аңлашыла ла бит... Шуға күрәлер ҙә, Ҡаҙан егетенең ҡорал тотоп, икенсе бер мәктәпкә түгел, ә тап үҙе уҡып сыҡҡан мәктәпкә барыуы күп нәмә хаҡында һөйләй булыр. Тик, ҡабатлайым, уның был ҡылығын ниндәй генә сәбәп менән дә аҡларлыҡ түгел. Шул дәрәжәлә мәктәбенә күңелендә нәфрәт һаҡлап йөрөгәс, тикмәгә булмағандыр, тейеүем генә. Ә үстең иң ҡурҡыныс нәмә икәнен барыбыҙ ҙа яҡшы белә. Уның күрә алмаған уҡытыусыһы йә булмаһа, класташтары күптән был мәктәптә юҡтарҙыр ҙа, тик шулай ҙа енәйәтсе күңелендә мәктәп нәфрәт объекты булып ҡалған, күрәһең. Тимәк, уҡыған йылдарында уның күңеленә юл табып, уны аңлаған, эскерһеҙ рәүештә уның менән һөйләшкән уҡытыусы булмаған бында, тип уйларға ҡала.

Уҡытыусы баланы тырышып уҡырға өйрәтергә, тәрбиәләргә тейеш инде ул, тип әйтеүселәр ҙә бар, дөрөҫ. Тик түбәнһетеү, кәмһетеү юлы менән түгел! Өҫтәүенә, башҡалар алдында уның абруйын төшөрөргә, ата-әсәһен, ғаилә проблемаларын килтереп ҡыҫтырырға һис ярамай, сөнки бала ата-әсәһе ҡылыҡтары өсөн яуап тоторға тейеш түгел. Бындай балаларҙы фәҡәт аңлап, яҡшыға дәртләндереп, позитив көйләргә тырышырға кәрәк. Мәктәптә насар уҡып та, аҙаҡ бына тигән кеше, эшсе йә ғаилә башлығы булып киткәндәр ҙә әҙ түгел бит. Шул уҡ ваҡытта гел бишкә генә уҡып, тормошта юғалып ҡалғандар ҙа осрай. Ҡыҫҡаһы, ғаилә тәрбиәһе аҡһай икән, бындай балаларҙы мәктәп айырыуса иғтибар һәм хәстәрлек менән солғап алырға, уларҙың, исмаһам, мәктәп эскәмйәһенән позитив кеше булып сығыуына булышлыҡ итергә тейештер тип уйлайым, ә баланы уның проблемалары менән япа-яңғыҙ ҡалдырырға түгел.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Июндә Башҡортостан халҡы, башҡа рәсәйҙәр кеүек үк, бер көнгә күберәк ял итә. Киләһе аҙнала, 12 июндә, ил - Рәсәй көнөн, Өфө һәм республика тағы ике мөһим датаны: Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың - 447, Салауат Юлаевтың 267 йыллығын билдәләй. Байрам шәмбегә тап килә. Шуға биш көнлөк эш аҙнаһында ул дүшәмбегә - 14 июнгә күсерелә. Йома, 11 июндә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара.

✓Башҡортостанда мал аҙығы әҙерләү ғәҙәттәгенән ике аҙнаға алдараҡ башланды. Май айының аномаль эҫе тороуы культураларҙың иртә өлгөрөүенә килтерҙе. Республика ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, йәшел масса аҙ ғына сыҡһа ла, үләнде саба башларға кәрәк. Бесән башланыр алдынан райондарҙа мал аҙығы әҙерләү буйынса семинарҙар уҙғарыла, унда яңы техника һәм технологиялар күрһәтелә, тип иҫкә төшөрҙөләр ведомствола.

✓Ошо көндәрҙә баш ҡалала "Тамыр селтәре" мәктәп телестудиялары селтәренең иң яҡшы командаларын бүләкләү тантанаһы булды. Өфөгә республика ҡалаларынан һәм райондарынан 80-гә яҡын бала килде. Беренсе урынды Нияз Мәжитов исемендәге Красноусол башҡорт гимназия-интернатының "Нөктә TV" телестудияһы яуланы. Икенсе урынды Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия-интернатының "Бал ҡорто" һәм Ишембай ҡалаһы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының "ЙәйғорТВ" студиялары бүлеште. Өсөнсө урын - Дүртөйлө ҡалаһы Назар Нәжми исемендәге Башҡорт гимназияһының "Өмөт-ТВ" студияһында.

✓Башҡортостанда талпандарҙан зыян күреүселәр артҡандан-арта, тип хәбәр итте Роспотребнадзорҙың республика идаралығы. 24 майға ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, 3 726 кеше табиптарға мөрәжәғәт иткән (2020 йылда - 2946), уларҙың 1478-е - балалар. Иҫкәртеү һәм эпидемияға ҡаршы саралар барышында идаралыҡ белгестәре акарицид ярҙамында эшкәртеү үткәрә. Бөгөнгә 3244,8 гектар майҙан, шул иҫәптән Өфө биләмәһендә 1156,1 гектар эшкәртелгән. Республикала бөтәһе 4 мең гектар майҙанды акарицид ярҙамында эшкәртеү планлаштырыла, был уҙған йыл кимәлендә.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МӘКТӘП ЙӘШЕНДӘГЕЛӘРГӘ...

**Мәктәп йәшендәге балаларға 10 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған аҡсаға ғаризаларҙы июль уртаһында ҡабул итә башлайҙар. Был турала Рәсәйҙең хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры урынбаҫары Ольга Баталина хәбәр итте.**

"Ғаризаларҙы июль уртаһында ҡабул итергә йыйынабыҙ, ҡарар сығарылғас, анығыраҡ дата билдәле булыр. Августа (өлгә датаһы билдәһеҙ) аҡса түләү башлана. Ғаризалар 1 ноябргә тиклем ҡабул ителә", - тип уның һүҙҙәрен еткерҙе ТАСС агентлығы. Бер тапҡыр бирелә торған түләү алыу өсөн Дәүләт хеҙмәттәренә йәки Күп функциялы үҙәккә, Пенсия фонды бүлексәһенә, социаль яҡлау органдарына бер генә ғариза бирергә кәрәк. Ҡалған эште дәүләт башҡара. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 21 апрелдә Рәсәй Президенты Владимир Путин балалы ғаиләләргә ярҙам саралары тураһында иғлан иткәйне. Атап әйткәндә, дәүләт башлығы 1 июлдән тулы булмаған ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән һигеҙ йәштән 16 йәшкә тиклемге балалар өсөн ай һайын уртаса 5 650 һәм түләү индерелеүе тураһында белдерҙе. Бынан тыш, түләүҙәр ауыр матди хәлдә булған йәклә ҡатынҡыҙҙарға ла ҡағыла. Бындай түләүҙең күләме - айына уртаса 6 350 һум (йәклөлөктөң алтынсы аҙнаһынан һуң). Шулай уҡ мәктәп йәшендәге (беренсе класҡа барыусылар ҙа) балалары булған ғаиләләргә Путин быйыл 10 мең һум аҡса түләргә ҡушты.

# ИҪКӘРТЕҮ САРАҺЫ

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында балаларға шыйыҡландырылған углеводород газын һатыу өлкәһендә сикләүҙәрҙе боҙған өсөн штраф билдәләнде.**

Һатыуҙы тыйыу һәм закон боҙғандарға санкциялар индереүҙең берҙән-бер маҡсаты - үсмерҙәр араһында сниффингтың (токсикоманияның бер төрө, үсмерҙәр газ еҫкәп иҫерә) таралыуын туҡтатыу. "Былтыр көҙ беҙ балиғ булмағандарға ошондай продукция һатыуҙы тыйған закон ҡабул иткәйнек, - тип хәбәр итте Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Һүҙ көнкүрештә файҙаланыу өсөн газ менән теләһә ниндәй һыйышлыҡтар, ҡабыҙғыстар тураһында бара". Ғәмәлдәге тәртипте боҙған өсөн штраф күләме түбәндәгесә: граждандарға - 3-4 мең, вазифалы кешеләргә - 20-25 мең, юридик шәхестәргә - 30-40 мең һум. Ҡабаттан закон боҙған осраҡта штраф күберәк: граждандарға - 4-5 мең, вазифалы кешеләргә - 30-40 мең, юридик шәхестәргә - 50-70 мең.

# СИКЛӘҮ КӘРӘК

**Башҡортостанда балаларға энергетиктар һатҡан өсөн штраф һалыу тураһында закон көсөнә инде.**

Документ балиғ булмағандарға, шулай уҡ белем биреү һәм медицина ойошмаларында, физкультура-һауыҡтырыу учреждениеларында, спорт ҡоролмаларында, балаларҙы ял иттереү һәм һауыҡтырыу ойошмаларында алкоголһеҙ тонусты күтәреү эсемлектәрен һатыуҙы тыйыуҙы күҙ уңында тота. "Сикләүҙәр уҙған йылда уҡ булдырылды, бына хәҙер уларҙы үтәмәгән өсөн штраф индерелде", - тип хәбәр итте республика парламентының матбуғат хеҙмәте. Граждандарға - 3-4 мең һум; вазифалы кешеләргә - 30-40 мең һум; юридик шәхестәргә - 150-200 мең һум. Законды ҡабаттан боҙған өсөн штраф түбәндәгесә: граждандарға - дүрт мендән биш мең һумға тиклем; вазифалы кешеләргә - ҡырҡ мендән илле мең һумғаса; юридик шәхестәргә - ике йөҙ мендән ике йөҙ илле мең һумға тиклем. Энергетиктарҙы һатыуҙы сикләү уның балалар организмына кире тәьҫир итеүе менән бәйле. "Төп проблема шунда: ошондай файҙаһыҙ эсемлектәрҙе яратыусылар - һаулыҡ тураһында бик аҙ уйланған үсмерҙәр, - тип билдәләй парламент спикеры Константин Толкачев. - Магазинда матур алюмин банкаларҙағы энергетиктар һалҡынайтҡыс эсемлектәр эргәһендә тора һәм бер кемдә лә һағайтмай. Әгәр бала бер туҡтауһыҙ энергетиктар ҡулланһа, уның сәләмәтлегенә зыян килеүе ихтимал".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯУАПЛЫ ҠАРАЙЫҠ!

**Бер айҙан Өфөлә башланырға тейешле VI Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерлек тамамланып килә. Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә сарала ҡатнашыусылар өсөн обсерватор һәм бәйләнешкә инеүселәрҙең исемлектәре әҙерләнеүе билдәле булды.**

"Уҙған аҙнала беҙ Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Татьяна Голикова рәйеслегендә Фольклориадаға әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты ултырышын үткәрҙек. Бөтә мәсьәләләрҙе тикшерҙек. Муниципалитеттарҙағы коллегалар, иғтибар итегеҙ - кемдәр һеҙҙең районға Фольклориадаға килгән делегациялар менән аралаша, уларҙың бөтәһе лә прививка яһатырға тейеш, был мотлаҡ. Йә иһә ПЦР-белешмә килтерергә, йәки прививка эшләтергә тейешттәр, антиматдәләр менән", - тине Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров.

Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова әйтеүенсә, Роспотребнадзор һәм Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән берлектә Фольклориадаға обсерватор итеп Өфөләге "Йәйғор" шифаханаһы һайланған. "Барлыҡ муниципалитеттарҙан, ведомстволарҙан исемлектәр йыйылған, бәйләнешкә инеүселәрҙең исемлектәре республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығына тапшырылған. Фольклориадала ҡатнашҡан райондар Өфөгә яҡын урынлашҡан, әгәр ул-был була ҡалһа, бында алып килергә мөмкинлек бар", - тип хәбәр итте министр. Билдәләнеүенсә, бөгөнгә 48 ил Фольклориадала ҡатнашырға теләк белдергән, биш ил ҡарар ҡабул итергә йыйына.

# АЙЫҠ ҺАБАНТУЙҘАР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика муниципалитеттарында һабантуй ойошторолған көндәрҙә хәмер һатырға ярамағанын хәтергә төшөрҙө.**



- Һабантуйҙарҙы үткәрергә кәрәк, халыҡ һағынған. Ләкин һабантуйҙарҙы айыҡ уҙғарылығыҙ, - тип мөрәжәғәт итте Хәбиров муниципалитет башлыҡтарына. - Һабантуй көнөндә биләмәлә алкоголь һатылмаһын. Беҙҙе әрләйҙәр, ҡайҙалыр көләләр, аҫтыртын йылмаялар, әммә беҙ дөрөҫ эшләйбеҙ. Сөнки кешеләр балалары менән күңел асырға килә, ә иҫеректәргә ҡарарға түгел.

Хәбәр ителеүенсә, 4 июндә Башҡортостанда һабантуйҙар башлана. Тәүгеләрҙән булып һабан байрамын Йылайыр районында билдәләйҙәр.

5 июндә Әбйәлил, Әлшәй, Архангел, Ауырғазы, Баҡалы, Благовар, Благовещен, Бүздәк, Бөрйән, Дәүләкән, Дүртөйлә, Ейәнсура, Иглин, Ҡалтасы, Ҡырмыҫҡалы, Көйөргәҙе, Мәләүез, Миәкә, Нуриман, Тәтешле, Өфө, Хәйбулла, Саҡмағош, Шишмә һәм Яңауыл райондары игенселәре һабантуй үткәрә. 12 июндә - Асҡын, Балтас, Балаҡатай, Бишбүләк, Бөрө, Борай, Ғафури, Дыуан, Йәрмәкәй, Илеш, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Күгәрсен, Кушнаренко, Мәсетле, Мишкә, Салауат, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Туймазы һәм Федоровка, ә 13 июндә Шаран районы халҡы һабантуй ойоштора.19 июндә Бәләбәй, Белорет һәм Краснокама райондарында һабан байрамы була. 26 июндә - Баймаҡ районында. 8 июлдә - Учалы районында. 10 июлдә - Ишембай районында.

# ТЫУЫМДЫ АРТТЫРЫУ ӨСӨН...



**Республика Йортонда үткән кәңәшмәлә тыуымды арттырыуға йүнәлтелгән өҫтәмә саралар тураһында фекер алыштылар.**

- Демографик сәйәсәттең төп бурысы - ул халыҡ һанының тәбиғи үсешен тәьмин итеү, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Республикала тыуымды күтәреүгә йүнәлтелгән саралар ҡабул иттек, проблемалы мәсьәләләрҙе билдәләнек. Был тәңгәлдә тағы нимә эшләй алыуыбыҙ хаҡында ла уйларға кәрәк.

БР ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова Башҡортостанда бер әсәнән тыуған балалар һаны юғары булыуын, республикала тәүге бала тыуыу күренеше кәмеһә лә, өсөнсө һәм артабанғы балалар донъяға килеүе 9 процентҡа артыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Тыуым артыуына айырылышыу осраҡтары кәмеүе лә булышлыҡ иткән. Былтыр был һандың 2019 йылға ҡарағанда 5,4 процентҡа аҙыраҡ булыуы күҙәтелә.

Тыуым һанын арттырыу мәсьәләһендә шулай уҡ аборт эшләтергә ҡарар иткән ҡатын-ҡыҙҙар менән консультация үткәреү, уларға психологик ярҙам күрһәтеү ҙә ҙур роль уйнай. Былтыр тап ошо йүнәлештәге эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә аборттар һанын 15 процентҡа кәметеүгә өлгәшелгән, йәғни 1601 сабыйҙың ғүмере һаҡлап алып ҡалынған. Эко йәки яһалма аталандырыу юлы менән үткән йылда 630 ҡатын әсәлек шатлығын кисергән. Билдәле булыуынса, был процедура республика бюджеты иҫәбенә субсидиялана - был хаҡта һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин һөйләне.

2019 йылда старт алған мәктәпкәсә белем биреү сертификатын биреү буйынса эксперимент та үҙенең һорау менән файҙаланғанын күрһәтте. Ошо программа арҡаһында шәхси балалар баҡсаһы дәүләт финанслауына эйә, ә ата-әсәләр муниципаль мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларындағы кеүек ғәҙәти сумма ғына түләй. Был экспериментта тәүҙә Стәрлетамаҡ ҡына ине, хәҙер Өфө һәм республиканың башҡа ҡалалары ла ҡушылды. Әйткәндәй, 2020 йылда 1059 сертификат бирелгән. Быйыл тағы 2 меңгә яҡын сертификат планлаштырылған.

Республиканың бала тыуҙырыу йорттарында алып барылған һорау алыу йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Башлығы шулай уҡ ауырлы ҡатындарҙы витаминлы туҡландырыуҙы ойоштороу, булаҫаҡ һәм йәш әсәләргә онлайн-курстар булдырыу буйынса тәҡдимдәр әҙерләүҙе йөкмәтте.

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй көнө, Өфө ҡалаһенә нигеҙ һалыныуға - 447, Салауат Юлаевтың тыуыуына 267 йыл тулыу уңайынан байрам саралары Өфөнөң Ленин майҙанында, "Торатау" Конгресс-холлында, "Ватан" паркында, Яҡутов исемендәге паркта һәм Дуҫлыҡ монументында ойошторола. Ҡаланың Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы етәксеһе Рөстәм Хәмитов һүҙҙәренсә, төп иғтибарҙы мэрия йәшелләндереүгә бүлә - 560 мендән ашыу бер йыллыҡ сәскә, 315 мең ҡыуаҡлыҡ һәм 15 мендән ашыу ағас үҫентеһе ултыртылған. Шулай уҡ Өфө властары байрамдарҙа тулыһынса байрам иллюминацияһын ҡабыҙырға уйлай.

✓Өфөлә 1 июндә рәсми рәүештә һыу инеү миҙгеле асылды. Билдәләнеүенсә, баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн 10 ял итеү урыны әҙерләнгән. Унда ҡотҡарыусылар эшләй, унайлы һәм хәүефһеҙ ял өсөн бөтә шарттар бар. Атап әйткәндә, Дим районында - "Карьер", Калинин районында - "Комло", "Гольфстрим", "Ожмах яры", Киров районында - "Кояшлы", Ленин районында - "Йылғасы" стадионы янында, "Аҡ Яр Затон", "Аҡ Яр Нижегородка", Октябрь районында "Кояш яры", "Сипайлово Сочиһы" пляждары. Фажиғәгә юл ҡуймау өсөн Өфөлә һыу инеү өсөн тәғәйенләнмәгән урындарҙа иҫкәртеү рейдтары ойошторола.

✓Өфөлә легендар ҡотопсо Валериан Альбановҡа һәм Башҡортостан ҡотопсоларына бағышланған музейҙы асыу тантанаһы уҙҙы. Сарала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. Музей экспозицияһында йөҙҙән ашыу артефакт һәм төрлө экспонаттар иҫәпләнә. Шуларҙың иң ҙуры - Өфөнөң яңы арт-объектына әүерелгән 19-сы быуат яҡоры. Шулай уҡ музейҙа кинозал һәм мәҙәни-белем биреү саралары, оҫталыҡ дәрестәре уҙғарыу өсөн каютот-компания бар. Уҡыусылар, уларҙың ата-әсәләре, уҡытыусылар музейға бушлай инергә мөмкин.

✓Өфөлә "Башҡортостан гүзәле-2021" матурлыҡ һәм традициялар конкурсының гала-финалы үтте. 2017 йылдан уҙғарылған конкурстың үҙенсәлекле традициялары бар. Унда төрлө йәштәге (5-12, 13-18 һәм 19-35 йәшлек) һылыуҡайҙар ҡатнаша. Социаль статусы мөһим түгел. Әйтәйек, өлкән төркөмдә кейәүгә, хатта күп балалы ҡатын-ҡыҙҙар булды. Конкурстың төп составында төп тажды һәм 100 мең һумды Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Гөлнара Юлбарыҫова алды. Гөлнараға 20 йәш, ул Башҡорт дәүләт аграр университетының өсөнсө курсында технологҡа уҡып йөрөй.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

МӘҒАРИФ

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала "Инклюзив һөнәри белем биреү сәйәсәте: халыҡ-ара тәжрибә һәм Рәсәй Федерацияһында ғәмәлгә ашырыу" тип аталған Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференция уҙҙы. Башҡортостандың Мәғарифты үҫтереү институты менән Өфө статистика, информатика һәм иҫәп-хисап техникаһы колледжы тарафынан өсөнсө тапҡыр ойошторолған сарала Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, Австрия, Беларусь илдәренән дә ҡатнаштылар.**



# КӘҢӘШ КОРҘОЛАР...

Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләргә белем алырға, тормошта үҙ урынын табырға ярҙам итеү - бөгөнгө көндөң мөһим мәсьәләләренең береһе. Был юҫыҡта беҙҙең республикала һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балаларға мәғариф учреждениеларында махсус шарттар булдырыу йөһәтенән бихисап эштәр атҡарыла. Улар өсөн унайлы тирә-яҡ мөхит булдырыла, махсус уҡытыу программалары төҙөлә, ҡыҙыу линия буйынса борсоған һорауҙар менән мөрәжәғәт итеү мөмкинлеге бирелә. Башҡортостан мәғариф министры урынбаҫары Миләүшә Латипова әйтеүенсә, республикала бөгөн һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән һәм инвалид балалар өсөн 36 коррекцион мәғариф ойошмаһы, Дистанцион белем биреү республика үҙәге эшләй. Унда 6 меңгә яҡын балалар белем ала, шуларҙың 788-е быйыл сығарылыш синыфтарында. "Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар араһында һорау алыуҙар һөҙөмтәһендә уларҙың штукатурсы, ашнаҡсы, баҡсасы, тегенсе, китап төплөүсе һөнәрҙәренә өҫтөнлөк биреүе асыҡланды. Шулай уҡ мебель комплектлаусы, иретеп йәбештереүсе, автомеханик, тракторсы, парикмахер, токарь һ.б. һөнәрҙәрҙә лә уҙләштерергә теләктәре бар", - тип атҡарылған эштәргә байҡау яһаны министр урынбаҫары.

Пленар ултырыш барышында Мәскәүҙең Белем биреүҙең яңы формалары дәүләт институтынан Анжелика Барсукова, Австрияның Интеллектуаль интеграциялар институтынан Ирина Сибгатуллина, Белоруссияның Республика һөнәри белем биреү институтынан Елена Касьяник, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Азат Янгиров һәм Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан белгестәр тәжрибә уртаҡлашты. Конференцияла ҡатнашыусыларҙың барыһына ла Екатеринбург ҡалаһынан "АртСозвездие" 4-се сәнғәт мәктәбенән бүлек етәксеһе Юлиә Малкованың сығышы ҡыҙыҡлы булды. Улар ауыр сирле балалар менән мәктәп йәшенән алып эшләй, артабан һөнәри белем алыуын, хеҙмәткә яраҡлашыуын да хәстәрләп, оҫтаханалар асҡандар, хатта балалар йортонан сыҡҡан йәштәрҙе ваҡытлыса торлаҡ менән дә тәьмин итәләр.

"Конференция тар йүнәлешле булыуға ҡарамаҫтан, ҡыҙыҡһыныусылар күп булды. Сығыш яһаусыларҙың тәжрибәһен, тәҡдимдәрен иғтибар менән тыңлап ултырҙым, бик ҡыҙыҡлы фекерҙәр яңғыраны. Беҙҙең уҡыу йорто әлеге көндә булған белем биреү программаларын яраҡлаштырыу, шул иҫәптән асыҡ мөхит булдырыу эшен алып бара һәм бөтә республика буйынса ла ошо бурыстарҙың үтәлешен күҙәтә. Үҙебеҙҙең колледжда 2017 йылдан алып асыҡ мөхит булдырыу маҡсатында әүҙем эшләйбеҙ. Беҙҙең коридорҙар тактиль түшәмдәр, таянғыстар, тауышты ҡабатлаусы приборҙар, аудиториялар кәрәкле ҡоралдар менән йыһазландырылған, баҫҡыстан күтәрелеү өсөн махсус лифт, барьерһыҙ бәҙрәфтәр һәм башҡа уңайлы шарттар бар. Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар хоҡуҡ тәртибен һаҡлау йүнәлешенән тыш, бөтә белем биреү йүнәлештәрендә лә уҡый ала", - ти Өфө статистика, информатика һәм иҫәп-хисап техникаһы колледжы директоры Сәйфетдин Ҡунысбаев.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ҠЫҪҠАСА

# БҮЛӘК ОТОРҒА БУЛА

✓ **Башҡортостандың баш ҡалаһында яңы коронавирус инфекцияһынан прививка яһатырға теләгәндәр араһында популярлыҡ яулаған өҫтәмә мобиль вакцинация пункттарын асырға тәҡдим иттеләр.** Билдәле булыуынса, тиҙҙән "Аквамарин", "Үҙәк" сауҙа үҙәктәрендә, "Лента" гипермаркетында, "Өфө моторҙар эшләү берекмәһе" мәҙәниәт һарайында, "Простор" сауҙа үҙәгендә күсмә вакцинация кабинеты асылырға тейеш. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быға тиклем Өфөлә дүрт мобиль пункт эшләне: Башҡорт опера һәм балет театрында, "Мега", "Планета" һәм "Башҡортостан" сауҙа үҙәктәрендә. Башҡортостандың баш ҡалаһында коронавирустан прививка яһатҡандар араһында фатир һәм гаджеттар уйнатыла. Ҡатнашыу өсөн вакцинация пункттарының береһендә прививка яһатырға, үҙенсәлекле QR-код менән флаер алырға һәм уны "Сәләмәт Өфө" сайтында теркәргә кәрәк. Конкурста ҡатнашыусылар араһында 23 июндә "Вся Уфа" телеканалы эфирында ҡиммәтле бүләктәр, шул иҫәптән Өфөлә бер бүлмәле фатир, 10 смартфон уйнатыла. Акция 20 июнгә тиклем дауам итә.

✓ **Өфөлә 8 Март һәм Комсомол урамдарын реконструкциялау дауам итә.** Объекттарҙың ҡатмарлы булыуы сәбәпле, эштәр өс йылға планлаштырыла: 2019 йылда башлана һәм быйыл йыл һуңында тамамланырға тейеш. Әле ҡайһы бер участкалар финиш һыҙығына сыҡҡан да инде. Аныҡлап әйткәндә, 8 Март урамында Минһажев урамынан Әй урамына тиклем арауыҡта юлдарға асфальт-бетон ҡатнашмаһы һалына башлаған, барлыҡ өс ҡатлам асфальт түшәү ҡаралған. Урамдың ҡалған участкаларында һәм Комсомол урамында юл эштәре әүҙем алып барыла, борт таштары ҡуйыла, йәйәүлеләр юлдары эшләнә, яҡтылыҡ сығанаҡтары урынлаштырыла. 8 Март урамындағы Минһажев урамынан Әй урамына тиклем, Комсомол урамынан Һәҙиә Дәүләтшина бульварынан Галле ҡалаһы исемендәге урамға тиклем участканы Ҡала көнөнә, ә 8 Март урамындағы Әй урамынан Һәҙиә Дәүләтшина бульварына тиклемге участканы һәм Комсомол урамындағы Галле ҡалаһы исемендәге урамдан Лесотехникум урамына тиклемге арауыҡты 1 сентябргә тапшырыу планлаштырыла.

✓ **Тиҙҙән Өфөлә өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтарына рәхәтләнеп ял итеү өсөн тағы бер күркәм урын булдырыла. Йәмәғәт киңлеге Рихард Зорге урамындағы 44-се йорт янында барлыҡҡа киләсәк.** Яныраҡ подряд ойошмаһы унда эшкә тотондо. Сквер "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" төбәк проекты ярҙамында яңыртыла. Эш барышында йәйәүлеләр юлдары һәм тротуарҙар эшләү, урналар һәм эскәмйәләр ҡуйыу, тышҡы яҡтыртыу системаһын ҡороу ҡаралған. Шулай уҡ сквер биләмәһен йәшелләндереү - яңы ағастар һәм ҡыуаҡлыҡтар ултыртыу күҙаллана. Әле әҙерлек эштәре бара. Объектҡа материалдар килтерелә башланы. Эштәрҙе тамамлау ваҡыты - 2021 йылдың 1 авгусы.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ТАҘА ТОТОУ КӘРӘК!



**Республика Хөкүмәтендә уҙған кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө ҡалаһының коммуналь хеҙмәттәре эшенә ризаһыҙлыҡ белдереп, хәл-торошто төҙәтеүгә, етешһеҙлектә бөтөрөүгә бер аҙна ваҡыт бирҙе.**

Оперативкалағы һөйләшеүҙәр, әлбиттә, ошо күрәнештәргә анализ биреүҙән башланды. Тәү сиратта һүҙҙе "Ҡаланы таҙартыу буйынса махсус автохужалыҡ" МУП-ы директоры Рөстәм Халиҡов алып, көнкүрештең ҡаты ҡалдыҡтарын сығарыу тураһында отчет яһаны. Бөгөнгә махсус автохужалыҡ ҡаланың алты районында 4183 көнкүрештең ҡаты ҡалдыҡтарын туплау урынын хеҙмәтләндерә, был эшкә барлығы 122 берәмек техника йәлеп ителгән. Һәр көн Яңы Черкассылағы полигонға 595 тонна сүп-сар оҙатыла. Бигерәк тә эҫе көндәрҙә өмөләр һәм санитар айлыҡтар ваҡытында контейнер майҙансыҡтарын бушатыуҙа өҙәклөктәр килеп сыға. Шулай уҡ маршрут графиктары махсус транспорттың иҫке булыуы сәбәпле ватылыуы, водителдәр етешмәүе һөҙөмтәһендә үҙгәреүе ихтимал.

Шулай уҡ ҡалалағы юридик ойошмаларҙың МУП менән килешеүе булмауы ла контейнерҙарҙың тулып ултырыуы сәбәптәренең береһе булып тора. Ойошмалар һәм предприятиелар сүп-сарын сығара, әммә килешеү булмағас, улар иҫәпкә алынмай һәм был контейнер майҙансыҡтарына тура килгән нормативтан артып китә.

Хакимиәттең Экология һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау бүлеге начальнигы Ольга Филева белдереүенсә, айырым тороусы контейнер майҙансыҡтары күбеһенсә Киров һәм Совет районында. Сүп-сар үткәргестәре булған йорттар нигеҙҙә Киров һәм Октябрь районында урынлашҡан. Ленин районында 175 участка төҙөкләндереү талап итә. Ҡалалағы сүп-сар йыйыу майҙансыҡтарын тикшереү йомғаҡтары буйынса уларҙы киләһе йылда төҙөкләндереү планы эшләнгән. Әлегә план буйынса 122 майҙансыҡтың ҡоймалары ремонтланған, 28 майҙансыҡтың нигеҙе нығытылған, 31 майҙансыҡта евроконтейнерҙар ҡуйыу өсөн пандустар урынлаштырылған.

Оператив кәңәшмәлә шулай уҡ коммуналь хеҙмәттәрҙең Ҡала көнөн байрам итеүгә әҙерлеге лә тикшерелде. Был хаҡта мәғлүмәтте хакимиәттең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов еткерҙе. Быйыл төп байрам майҙансығы булып ғәҙәттәгесә Ленин исемендәге майҙан һәм ҡала парктары торасаҡ. Әлеге ваҡытта ҡаланы йәшелләндереү һәм сәскәләр менән биҙәү эштәре башҡарыла. Барлығы 560 мең бер йыллыҡ сәскәләр, 315 мең ҡыуаҡ һәм 2 мең ағас ултыртылған. Ҡалала 23 фонтан эшләй, уларҙың дүртеһендә музыка уйнай. Ял зоналарын яҡтылыҡ сығанаҡтары менән тәьмин итеүгә ҙур иғтибар бирелә. Байрам көнөндә хатта иллюминациялар ҙа ҡабыҙыласаҡ. Байрам ваҡытында коммуналь хеҙмәттең 2 меңдән ашыу хеҙмәткәре һәм 200 берәмек коммуналь техника эшләйәсәк. Бәләкәй принц әйтмешләй, планетаңды таҙартып торорға ла кәрәк бит...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Бил биртенгәндә

❖ Бил биртенгәндә (радкулит) шайтан таяғының (татарник колючий) өлгөргән орлоҡтарын йыйып алырға кәрәк. 2 ҡалаҡ орлоҡҡа ярты литр араҡы ҡойорға, 14 көн төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән болғап торорға. Шыйыҡса һарғылт-һоро төҫтә килеп сыға. Төнәтмә менән ауыртҡан урындарҙы ыуырға кәрәк, шулай уҡ боҫлама яһау өсөн дә ҡулланырға була. Был дауа ҡан йөрөшөн яҡшырта, тәнде йылыта. Шайтан таяғының төнәтмәһен янбаш-бот һәм тубыҡ быуындарын дауалағанда ла ҡулланырға була.

## Тире ауырыуҙары

❖ Экзема, таҙ, "ҡаҙ тиреһе" булғанда ҡырылған 1 шырпы ҡабы кер һабыны һәм 3 ҡап көкөрт алырға. Һабынды йылы һыуҙа ҡаймаҡ кеүек булғансы иретергә, көкөрттө ҡушып, яҡшылап болғарға. Килеп сыҡҡан ҡатышманы төнгөлөккә зарарланған урындарға һыларға. Иртәнсәк һабынлап, йылы һыу менән йыуып төшөрөргә һәм 3 көн дауамында одеколон (Иң яҡшыһы "Тройной"), йәки календула менән һөртөп торорға. Әммә һыу тейҙерергә ярамай! Оҙайлы сирләгәндә был ҡатышманы кискегә, иртәнсәк һәм тағы берҙе кискә ҡарай һөртөргә кәрәк. Был осраҡта һыу тейҙерергә лә, йыуынырға ла ярамай. Бынан тыш, күптәнге экземаны йәки бәшмәкте дауалау өсөн мазға нисә ҡап һабын тотонаһың, шул тиклем тамсы дегет ҡушырға кәрәк. Мәҫәлән, ике шырпы ҡабы ҡырылған һабын тотонғанда 6 ҡап көкөрт, ике тамсы дегет ҡушыла.

## Йәрәхәтләнгәндә

❖ Йәрәхәт уңалһын өсөн шешәгә кесерткәндең йәш япраҡтарын тултырып һалырға һәм өҫтөнә спирт ҡойорға. Ҡараңғы урында 14 көн төнәтергә, һөҙөргә. Ауыртҡан ергә килеп сыҡҡан төнәтмәнән боҫлама эшләргә. Йәрәхәт һәм яралар 2-3 көндә уңала.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Илеш районы вәкиле Нәзир Рәхимов үҙ ғаиләһе шәжәрәһен күрһәтте. Унда 1700 шәхесте берләштергән 24 быуын тураһында мәғлүмәт тупланған. Ҡалтасы районы уҙаманы Риф Саматов та 13 быуынды сағылдырған.*

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Бер ауылдағы һуғылған таҫтамалдарҙың да биҙәктәре айырылып торған. Быға 1909 йылда Мөхәмәтколой ауылында Д. Месарош һатып алған күтәреп һуғылған сөлгөләр асыҡ миҫал.

Ҡыҙыллы-аҡлы сөлгөлә (ВЭМ, кол. 79957) ҡыя шаҡмаҡтар һәм улар араһында урынлашҡан өсмөйөштәрҙән торған орнамент һыҙаты өс тапҡыр ҡабатланып килә. Һәр һыҙат бәләкәй ҡыя шаҡмаҡтар теҙмәһе менән ике яҡтан ҡаймаланған. Таҫтамалдың ҡыҙыл төҫтәге баштары өҫтән дә, аҫтан да аҡ ерлектә икешәр, өсәр буйҙан торған ике ҡат ҡайма менән уратылған. Икенсе бер сағыу сөлгөлә (кол. 80110) өс өлөшлө композиция асығыраҡ күренә. Биҙәктәр бер төрлө: уртаһы селтәрле, ситтәре "тараҡ" ҡыя шаҡмаҡтар рәткә теҙелгән, уларҙың араһында ҡалған бушлыҡта өсмөйөштәр урынлашҡан. Ике рәт ҡыя шаҡмаҡ теҙелгән урталағы һыҙатта нигеҙҙәре тоташып торған өсмөйөштәрҙән ҡыя шаҡмаҡ яһалыуы күренә. Ике аралағы ҡаймалар төрлө төҫлө, эсен ҡыя һыҙаттар киҫеп үткән бәләкәй квадраттар ярҙамында бүлгеләнгән. Таҫтамал башының ос яғында аҡ һәм ҡыҙыл туҡыма буйлап контраст төҫтәге арҡау ебе буйғау аша бер рәт булып үтә. Өсөнсө таҫтамалда (кол. 79958) биҙәкле ҡаймалар араһында ҡыҙыл ерлектә айырымланып, әммә бер тапҡырҙа ике пар мөйөштән торған бәләкәй генә оя биҙәктәр, ә урта өлөштә ыҡсым ғына парлы ҡыя шаҡмаҡтар урынлашҡан. Киләһе таҫтамал быныһына бөтөнләй ҡапма-ҡаршы: уның оҙон баштары өс өлөшкә бүленгән күтәреп һуғылған орнамент менән тулыһынса ҡапланған (кол. 79981). Өҫкө һәм аҫҡы өлөшөн ҡат-ҡат ҡабатлап эшләнгән ҡыя шаҡмаҡтар алып торған, ә уртаһын сиктәре ҡыя шаҡмаҡ фигуралар менән билдәләнгән ырғаҡтарҙан (интеграл формаһында) хасил булған селтәр ҡапланған.



*Күтәреп һуғылған сөлгөләр (Силәбе өлкәһе, Арғаяш районы, Мөхәмәтколой ауылы). ВЭМ. XX быуат башы.*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ*

# ГӘРӘЛӘР ЫРЫУЫН БАРЛАНЫ

**Ошо көндәрҙә Ҡалтасы районында гәрә (гәрәй) ырыуы башҡорттары ҡорға йыйылды. Йыйынға Башҡортостандың гәрәй ырыуы вәкилдәре йәшәгән райондарҙан делегаттар йыйылды.**

Гәрәләрҙең ерҙәре байлар, бүләр, ирәкте, йылан, йәнәй, ҡырғыҙ, таҙ, уран һәм ыуаныш ҡәбиләләре биләмәләренә күрше була. Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуынан һуң ҡәбиләнең аҫаба ерҙәре Ҡаҙан даруғаһының Гәрәй улусын тәшкил итә, һуңынан ул Ил-Гәрәй һәм Урман-Гәрәй улустарына бүленә. Гәрә ҡәбиләһе башҡорттары барлыҡ башҡорт ихтилалдарында әүҙем ҡатнашҡан. П. И. Рычков мәғлүмәттәренә ярашлы, XVIII быуат уртаһында Гәрәй улусында 273 йорт иҫәпләнгән. Гәрәләрҙең ерҙәре XVIII-XIX быуаттарҙа Бөрө һәм Минзәлә өйәҙҙәренә, ә 1798-1854 йылдарҙа, Башҡортостанда идара итеүҙең кантон системаһы осоронда - 5-се (10-сы, 11-се) һәм 11-се (12-се) башҡорт кантондарына ҡарай.

Гәрәй ырыуы башҡорт халҡының төньяҡ-көнбайыш төркөмөнә ҡарай, уларҙың ауылдары Башҡортостандың **Илеш районында -** Иҫке Айыу, Иҫке Бейектау, Иҫке Хажы (Хажы), Теләкәй, **Краснокама районында -** Баръяҙыбаш, Бачҡыйтау, Иҫке Аткүл, Иҫке Бөртөк, Иҫке Йәнйегет, Иҫке Ҡабан, Иҫке Ҡайынлыҡ, Иҫке Уразай, Иҫке Әшит, Ҡуян, Ҡыҙғау, Таҡталасыҡ, Әшит, Яңғыҙнарат, Яңы Аҡтанышбаш, Яңы Балтас, Яңы Бөртөк, Яңы Йәнйегет, Яңы Ҡабан, Яңы Нуғай, Яңы Ҡайынлыҡ, Яңы Суғанаҡ, Яңы Уразай, Яңы Хажи, **Ҡалтасы районында -** Буралы (Яңы Аткүл), Бурһыҡ, Гәрәй, Шәрип, Яңы Әшит, **Тәтешле районында -** Асыуйылға, Борғынбаш, Иҫке Аҡбулат, Иҫке Күрҙем (Күрҙем), Ҡашҡаҡ, Сараштыбаш, Түбәнге Ҡоҙаш, Шишмә, Шүлгән, **Яңауыл районында -** Асауҙыбаш, Иҫке Алдар, Йөгәмеш, Ҡушимән, Ҡыҙылъяр, Мәсәғүт, Сибәҙе, Сәлих, Тау, Түбәнге Сат, Урал, Үрге Сат, Юсыҡ, Ямаҙы, Яңы Алдар, **Татарстандың Аҡтаныш районында -** Бурһыҡ, Илсебай, Ирмәш, Иҫке Балтас (Балтач), Иҫке Жиәш (Зиәш), Иҫке Теләкәй, Ҡуян, Мерәс, Таҡталасыҡ, Түбән Аҡтанышбаш, Түбән Гәрәй (Иҫке Гәрәй), Түбән Таҡталасыҡ, Түмержә, Уразай, Шәрип, Әжәкүл, Юғары Аҡтанышбаш, Ямалы (Татар Ямалысы), Яңы Балтач, Яңы Гәрәй (Юғары Гәрәй), Яңы Жиәш (Ҡаратал).

Ҡалтасылағы йыйында Салауат Хәмиҙуллин, Юлдаш Йосопов, Искәндәр Сәйетбатталов, Нурислам Ҡалмантаев кеүек ғалимдар ошо тарихты тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрөп сығыш яһаны. Уларҙың сығышынан һуң ырыу вәкилдәре һүҙ алды. Тәтешленән килгән Әҙеһәм Фәрүәзетдинов "Тәтешле районы гәрәйҙәренең тарихы, мәҙәниәте һәм көнкүреше" тигән доклад менән сығыш яһаны. Светлана Сафина Яңауыл районы гәрәй ауылдары тарихы менән таныштырһа, Земфира Сәғитова Ҡалтасы ерендәге ошо ырыу ауылдары хаҡында һөйләне. Илеш районы вәкиле Нәзир Рәхимов үҙ ғаиләһе шәжәрәһен күрһәтте. Унда 1700 шәхесте берләштергән 24 быуын тураһында мәғлүмәт тупланған. Ҡалтасы районы уҙаманы Риф Саматов та үҙ шәжәрәһен төҙөгән, бының өсөн Өфө юлын күп тапаған, һөҙөмтәлә 13 быуынды тулыһынса сағылдырған шәжәрә ағасы килеп сыҡҡан. Ырыу йыйыны делегаттарының тәҡдимдәре Йыйын ҡарарында урын алды. Документҡа Гәрәй ырыуының сағыу вәкиле, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Суфиян Поварисовтың исемен мәңгеләштереү; милли үҙенсәлекте һаҡлап алып ҡалыу, үҙ ырыуының тарихын өйрәнеү маҡсатында Илеш, Ҡалтасы, Краснокама, Тәтешле, Яңауыл райондарында "Шәжәрә байрамы" үткәреү, Татарстандың Аҡтаныш районында йәшәгән гәрәйҙәр менән ошо тәжрибәне уртаҡлашыу; традицион спорт төрҙәрен үҫтереү; Гәрәй ырыуынан сыҡҡан арҙаҡлы шәхестәрҙе барлау һәм уларҙың исемен мәңгеләштереү өҫтөндә эшләү; ата-әсәләр йәмәғәтселеге менән мәктәптәрҙә уҡытыу теле итеп туған (башҡорт) телен һайлау буйынса эште әүҙемләштереү һәм башҡа пункттар индерелде. Шулай уҡ Гәрәй ырыуы советы һайланды. Совет рәйесе булып "Без башҡортлар" хәрәкәте етәксеһе Радик Бәхтиев ҡалды. Делегаттар Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарамағындағы геральдика комиссияһы әҙерләгән ырыу гербын һәм Ҡалтасы уҙаманы Риф Саматов шиғырына Илүсә Попова ижад иткән гимнды бер тауыштан раҫланы.

Дәртле көйҙәре менән тамашасылар күңелен рухландырған билдәле ҡурайсы Роберт Юлдашев йыйылыусыларға мөрәжәғәт итеп: "Күҙ алдына килтерегеҙ, һеҙ бар күңелегеҙҙе һалып кемгәлер бүләк әҙерләнегеҙ, ти. Уны тапшырғас, был кеше бүләкте бер аҙҙан ташланы ла китте. Һеҙгә оҡшар инеме ошо хәл? Юҡ, әлбиттә. Ә һеҙҙең тарихығыҙ, йолаларығыҙ, мәҙәниәтегеҙ, телегеҙ - ул ата-бабаларығыҙҙан ҡалған бүләк. Бер үк уны ташлап ҡуймағыҙ, һаҡлағыҙ", - тине. Гәрәй ырыуы йыйыны, быға тиклем үткән Балыҡсы, Уран, Унлар, Ҡобау, Дыуан һәм башҡа бик күп йыйындар кеүек үк, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының үҙ диалекты арҡаһында йөҙ йылға яҡын әҙәби телдән айырылыуҙарына ҡарамаҫтан, башҡорт үҙаңын һаҡлап ҡала алыуҙарын, үҙҙәрен башҡорт тип таныуҙарын, халҡының тарихын һәм мәҙәниәтен хөрмәт итеүҙәрен дәлилләне.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

*Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?*

# МИШӘРҘӘР КЕМ?



**Тарихи-мәҙәни үҙәктәр - Рәсәй өсөн милли мәҙәниәтте үҫтереүҙең уникаль төрө. Әле беҙҙең республикала 14 тарихи-мәҙәни үҙәк эшләй. Күптән түгел Балтас районында тағы бер - Мишәр тарихи-мәҙәни үҙәк ойошторолдо.**

Шул ваҡиғанан һуң Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы "Башҡортостан мишәрҙәре" тип исемләнгән йыйынтыҡ баҫып сығарҙы. Унда мишәр халҡының тарихы, йәшәгән урыны, тел үҙенсәлеге, арҙаҡлы шәхестәре тураһында мәғлүмәт тупланған. Республикала йәшәгән татарҙарҙың күбеһенең тамырҙары мишәрҙәрҙән башлана. Башҡортостан Фәндәр академияһы вице-президенты, тарих фәндәре докторы Айтуған Аҡманов мишәрҙәрҙең Рәсәй, шул иҫәптән Башҡортостан тарихына ла ҙур йоғонто яһауы хаҡында билдерҙе: "Улар әлеге Башҡортостан биләмәһендә рәсми рәүештә XVIII быуатта бер нисә башҡорт улысы территорияһында хәрби-хеҙмәт ҡатламы сифатында теркәлгән", - ти Айтуған Аҡманов. Йәғни, академик әйтеүенсә, ул ваҡытта мишәрҙәр хәрби хеҙмәт үтәгән халыҡ төркөмө булараҡ билдәле булған. 60 йылға яҡын, XVIII быуаттың аҙағынан алып 1861 йылға тиклем, мишәрҙәр һәм башҡорттар башҡорт-мишәр ғәскәре составында була. "Беҙҙең край халҡының берҙәмлегенә нигеҙ шул ваҡытта уҡ һалынған. Дөйөм хәрби тарихыбыҙ - шуға сағыу миҫал", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Айтуған Аҡманов.

Мишәрҙәр - татарҙар һәм өлөшләтә башҡорттар составына ингән төрки телле этнос. Улар Цна, Мокша һәм Сура йылғалары бассейнындағы тарихи Мещера өлкәһендә формалашҡан. Урыҫ йылъяҙмаларында ла мишәрҙәр һәм мордваларҙың бер халыҡ икәнлеге хаҡында мәғлүмәт бар. Ҡаҙан ханлығына урыҫ ғәскәрҙәренең походтарының береһен һүрәтләгәндә кенәз А. Курбский: "Ә батша беҙҙе, ун өс мең кешене, Рязань һәм һуңынан Мишәр, йәғни Мордва ере аша ебәрҙе", - тип яҙған.Ошо һәм башҡа мәғлүмәттәр нигеҙендә урыҫ тарихсыһы Н. Карамзин мишәрҙәрҙең килеп сығышы тураһында тәүге гипотезаны тәҡдим иткән: "Урта быуат йылъяҙмаларында мишәрҙәр тип Мокша йылғаһы тирәһендәге Пенза һәм Тамбов губерналарында йәшәгән муҡшыларҙы атағандар". Мишәрҙәрҙең этник нигеҙен мордва ҡәбиләләре тәшкил итеүе хаҡында VI быуатта уҡ гот тарихсыһы Иордан да билдәләп үткән.

**"Башинформ" материалдарынан.**

✓ *Тәү осорҙа байлар ырыуы башҡорттары Урал аръяғы ерҙәрендә көн итә. "Беҙ - Ырымбур губернаһы Ҡаҙан даруғаһы Байлар олоҫо башҡорттары нәҫеле. Беҙ, үҙебеҙҙең Байлар олоҫонда, дүрт түбәнән тармаҡланып киткән башҡорттар..."*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - БАШҠОРТ БАЙЛАРЫ



XI быуат уртаһында көнсығыштан килгән ҡеүәтле ҡыпсаҡ ҡәбиләләре һөжүме һөҙөмтәһендә Уғыҙ державаһы тарҡала. Уғыҙҙарҙың ҙур бер өлөшө, Урта Азиянан Иран тарафтарына күсеп китеп, Ислам динен ҡабул итә һәм артабан Сельджукидтар империяһына нигеҙ һала. Икенселәре көнбайышҡа, Киев Русе сиктәренә тиклем барып етә, уларҙы унда торктар (төркиҙәр), тип атай башлайҙар. Өсөнсө төркөм төньяҡҡа, Башҡорт иле ерҙәренә табан йүнәлә: күрәһең, тап улар араһында Байат ҡәбиләһе лә була. Әйтергә кәрәк, Уғыҙ державаһы составында һуңынан уртаҡ башҡорт этнонимын ҡабул иткән башҡа төрки ҡәүемдәре лә була: боронораҡ әйләләр, һарттар һәм киләсәктә башҡорттар составына ҡушыласаҡ тағы ла бер нисә ырыу Урта Азияла, Һырдарья буйҙарында көн иткән.

Әйткәндәй, Бавлы ауылын төйәк иткән байлар ырыуы башҡорттары шәжәрәһендә уларҙың төп бабаһы Сәлмән исемле булып, әүәл ата-бабаларының Төркөстан ерҙәрендә йәшәүе хаҡында бәйән ителә.

Тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеев башҡорт халҡының килеп сығышын анализлағанда ошондай фекергә килә: "Бөрйән, үҫәргән, түңгәүер, тамъян, байлар һәм башҡа ҡәбиләләрҙең дөйөм башҡорт атамаһы аҫтында берләшеүе боронғо башҡорт этносының ижтимағи-этник яҡтан ойошоуында төп фаза булып тора".

Башҡорт этносы составында "байан" атамаһы "байлар" формаһында ҡулланыла башлай, бынының да монгол теленә яраҡлаштырылған "байат" этнонимының башҡорт теленә күсерелгән калькаһы рәүешендә ҡарап була. Бында монголса унгут атамаһының башҡорттарҙа унлар формаһын алыуын да ошоға миҫал итеп ҡарау фарыз.

Тәү осорҙа байлар ырыуы башҡорттары Урал аръяғы ерҙәрендә көн итә. Санкт-Петербургтың Көнсығыш ҡулъяҙмалары институтында табылған бер шәжәрәлә бына ниҙәр теркәлгән: "Беҙ - Ырымбур губернаһы Ҡаҙан даруғаһы Байлар олоҫо башҡорттары нәҫеле. Беҙ, үҙебеҙҙең Байлар олоҫонда, дүрт түбәнән тармаҡланып киткән башҡорттар... Бәкчура хан (йәшәгән) Ҡарағайҙа, ул Яйыҡ йылғаһы үрҙәрендә. Уның улы Ғабдулла бей, уның улы Иләҙ, уның улы Сайман, уның улы Яҡуб, уның улы Янбулат, уның улы Бикмөхәммәт, уның улы мулла Туймөхәммәт, уның улы Әлмөхәммәт мулла. Туймөхәммәттең өлкән улы. Ул ике ауылдың башы булған: беренсе ауыл - Иҫке Әлмәтмулла, икенсе ауыл - Баҙарлы Әлмәтмулла Зәй йылғаһы буйында..." Әле әйтеп үтелгән ауылдар хәҙерге Татарстан территорияһында урынлашҡан (Сарман һәм Әлмәт райондарында). Әммә, әлеге шәжәрә тексында әйтелгәнсә, элгәре байлар Башҡортостандың Урал аръяғы территорияһында, Яйыҡ башында йәшәгән, уларҙың бабаһы Бәкчура хан (тарихи документтарҙа - Бекчура-хан) тип аталып йөрөтөлгәне билдәле.

Тарихсы, теолог, суфый шәйехе Морат Рәмзи сығышы менән байлар ырыуы башҡорттарынан була, ул үҙенең "Талфик аль-ахбар" тигән билдәле тарихи әҫәрендә ата-бабалары хаҡында ошондай мәғлүмәт килтерә: "Имя Бекчурахана широко известно, обстоятельства его жизни - неизвестны, говорят, что он жил в верховьях Джаика в местности под названием Карагай, а в нашем шежере - что он жил на реке Ай в местности под названием Тышкы Ялан и Чубар-куль в Джаик-Карагае". Тимәк, байлар ырыуының Көньяҡ Уралдағы тәү төйәге - Яйыҡ һәм Әй йылғалары үрендә була, был йылғалар Урал һыртынан, бер-береһенән артыҡ алыҫ булмаған ерҙән башлана.

Байларҙың ни сәбәпле һәм ҡасан әле йәшәгән ерҙәренә күсеп килеүе хаҡында энтекле мәғлүмәт юҡ. 1967 йылда Татар АССР-ының Сарман ауылы кешеһе Ф. Хәмиҙуллиндан байларҙың ата-бабалары хаҡында бер риүәйәт яҙып алынған. Ошо риүәйәттә Бәкчура хандың һәм уның халҡының монгол яуына тиклем үк Минзәлә, Ыҡ һәм Ағиҙел йылғалары буйында йәшәүе хаҡында бәйән ителә. "Сыңғыҙ һәм Батый баҫҡынсылығына тиклем Ағиҙел, Ыҡ, Меллә һәм Минзәлә йылғалары тәрән һыулы, балыҡҡа бай, уларҙың үҙәндәре ҡуйы урман менән ҡапланған ине. Был тарафтарҙа байлар һәм буләр башҡорт ырыуҙары күсеп йөрөгән. Уларҙың ерҙәренән ғәскәре менән Батый хан үткәс, башҡорт ырыуҙарының тыныс тормошо бөтә. Хан Булғар илен буйһондорорға китеп барышлай башҡорт ҡәбиләләрен ҡыра һәм талай. Минзәлә һәм Ыҡ арауығында күсеп йөрөгән Ҡарағай-Атай ырыуы бигерәк тә күп бәләләргә дусар була. Хан ғәскәре башлығына буйһонмаған өсөн аҡ һаҡаллы Ҡарағай-Атайҙы барса ырыу алдында ҡамсы менән һуҡтыралар, ә ир-аттарҙың баштарын киҫәләр. Был хәл Ҡарағай-Атайҙың оло улы Бәкчура өйҙә булмаған мәлдә була. Һунарҙан ҡайтҡан Бәкчура, баҫҡынсылар ҡылғанды күреп, ҡайғыһынан шаңҡып ҡалып, аяуһыҙ нәфрәтләнә. Утты-һыуҙы үтергә әҙер булған егеттәрҙе йыйып алып, ул Батый ғәскәренә ҡаршы сыға. Дошмандарын эҙәрләп барып, ҡырып һала. Батыйҙың булғарҙарға тәүге һөжүме туҡталып ҡала".

Ә бына Хисаметдин бин Шәрәфетдиндең "Таварихи Булгарийа" әҫәрендә Бәкчура хандың Тамерлан заманында йәшәүе һәм Булғар хакимы булыуы хаҡында әйтелә. Баҫҡынсы Аҡһаҡ Тимер, йәнәһе, "ошо Булғарҙы ер менән тигеҙләргә ант иткән". Ҡаланы баҫып алғас, ул Бәкчура хандың һәм уның 12 вәзиренең башын киҫтерә. Беҙ бында Кама буйы башҡорттарының, шул уҡ байларҙың эпик традицияһын күрәбеҙ: Бәкчура хандың Батый менән дә, Тамерлан менән дә һуғышып йөрөүе легендар ваҡиға итеп ҡабул ителә.

Үҙе йәшәгән замандың титулатураһына ярашлы, байларҙың баш бабаһы Бәкчура бәк йәиһә бей, тип аталып йөрөтөлгән булырға тейеш. Әммә башҡорт шәжәрәләрендә лә, әле күрһәтелгән "Таварихи Булгарийа" әҫәрендә лә, халыҡ риүәйәттәрендә лә уны хан дәрәжәһенә күтәрәләр. Был да башҡорттарҙың эпик хикәйәттәренә хас булған күренеш.

Бәкчура хандың вариҫтарынан булған Әлмөхәммәт мулла (Әлмәт мулла) Туймөхәммәтов (архив документтарында - Туйметов), архив сығанаҡтарына ярашлы, XVIII быуаттың тәүге сирегендә йәшәгән. Шәжәрә буйынса Бәкчура хандан Әлмөхәммәт муллаға тиклем 7 быуын алышына. Тимәк, Бәкчура хан XV быуат аҙаҡтарында - XVI быуат баштарында йәшәгән була. Тап шул осорҙа байлар ырыуы башҡорттарының Урал аръяғынан Минзәлә һәм Ыҡ үҙәненә күсеп килеүен күҙаллап була. Ошо заманда Себер йортонда барған сәйәси ваҡиғалар байларҙың яңы төйәк эҙләп китеүенә сәбәп булғандыр. Әйтергә кәрәк, Башҡорт иленең Мәскәү батшаһына буйһона башлаған осорона - XVI быуат урталарына тиклем буласаҡ Себер даруғаһында, Урал аръяғы территорияһында байтаҡ ҡына башҡорт ырыуҙары көн итә. Билдәле башҡорт яҙыусыһы, ғалим-мәғрифәтсе Таджетдин Ялсығол әл Башҡорди (1768 - 1838) үҙенең "Таварихи Булгарийа" әҫәренә әйле башҡорттарының легендар шәжәрәһен һүҙмәһүҙ теркәп ҡалдырған. Бында Байлар Иштәктең (башҡорт эпонимы) ейәне, Бәкәтундың улы - легендар шәхес сифатында күрһәтелә. Әйле, Юрмый, Байҡы, Ирәкте, Салъйоғот Байларҙың ир туғандары итеп күрһәтелә. 1730 йылда Өфө провинция канцелярияһында төҙөлгән "Башҡорт олоҫтары реестры"нда Байлар олоҫо хаҡында ошолай тип яҙылған "...волость Балярская по Каме реке, по Ижу, по Мензеле и по другим речкам, леса и степи". Байлар олоҫо үҙе Ҡалмаш, Салауыш, Биҙәкин һәм Турай тигән 4 түбәгә бүленә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ирҙәр үлә, башын һала...

М.М. Шайморатов, дошман тылына үтеп инеп, 313-сө полк яугирҙарына Чернышковский ҡалаһының көньяҡ яғынан, ә ҡалған ике полкҡа көнсығыштан бер үк ваҡытта атакаға күсергә приказ бирә. Совет танкылары ла, хәрәкәт барышында төрлө яҡтан көслө ут асып, яугирҙарға ҡеүәт өҫтәй. Подполковник Б. Сәйетғәлиндың 313-сө полкы, икенсе бер частың танк десанты менән берлектә, дошмандың ҙур төркөмөн тар-мар итә. 275-се һәм 294-се полктар ҙа уларҙан ҡалышмай - көнсығыштан ҡала урамдарына бәреп инә. Улар башҡа уксы дивизия һалдаттары менән бергә һөжүм итеп, өйҙәрҙең подвалдарынан ут асҡан фашистарҙы, гранаталар ташлап, йәиһә штык һуғышына күсеп, юҡ итә.

1943 йылдың 6 ғинуарында ошо алыш хаҡында "Известия" гәзитендә былай тип хәбәр ителә: "...Механизацияланған пехота частары һәм атлы ғәскәр подразделениелары ҡыҙыу маневр менән көньяҡтан һәм төньяҡтан немец ғәскәрҙәрен урап үтте һәм Чернышковский ҡалаһынан көнбайыштараҡ бер нисә урында тимер юл магистрален өҙөүгә өлгәште. Шулай итеп, ҙур терәк пунктын обороналаған дошман бар яҡтан да ҡыҫымға эләкте. Ошо алыштарҙа немецтар күп тере көсөн һәм техникаһын юғалтты. Беҙҙең ғәскәрҙәр бай трофей алды".

Хәрби донесениеларҙағы мәғлүмәттәр буйынса, Чернышковский ҡалаһын һәм ошо уҡ исемдәге станцияны азат иткәндә совет ғәскәрҙәре ҡулына дошмандың 17 самолеты, 2 миллион артиллерия снаряды, 500 мең авиация бомбалары трофейға алына.

112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙары Сталинград фронтында иҫ киткес батырлыҡ өлгөләре күрһәтә. 8-се кавкорпус командиры урынбаҫары, Миңлеғәли Шайморатов һәләк булғандан һуң 16-сы гвардия атлы дивизияһы тип атала башлаған дивизиябыҙҙың командиры вазифаһына тәғәйенләнгән Григорий Андреевич Белов үҙенең "Путь мужества и славы" тигән хәтирәләр китабында башҡорт офицерҙарына ла, рядовой атлыларға ла юғары баһа бирә. Ошо китаптан өҙөк тәҡдим итәбеҙ:

"Красный Яр хуторындағы складтарҙы ҡулға төшөрөү хаҡында хәбәр алғас, мин шундуҡ складтарҙы ҡарау һәм корпус частарын трофейҙар менән тәьмин итеү мөмкинлеген урында асыҡлау өсөн Башҡорт дивизияһына киттем. Шул уҡ ваҡытта М.М. Шайморатовты һәм дивизияның башҡа офицерҙарын Яңы йыл һәм боевой уңыштары менән ҡотларға ла теләй инем.

Шайморатовтың команда пункты утар ситендәге ниндәйҙер бер ярым подвалда урынлашҡан ине. Мин уға ингәндә, ул дошмандың боевой рәттәрен ентекләп күҙәтә ине. Һаулыҡ һорашҡас, ул минә әле генә кире ҡағылған атака тураһында һөйләне һәм уның ҡабатланыуын көтөүе хаҡында ла әйтте. Ә яңынан бомбаға тотоуҙы һәм атаканы мин үҙем дә күҙәтеп торҙом.

112-се атлы дивизия Красный Яр утарында дошман атакаларын кире ҡаҡҡан саҡта корпустың төп көстәре аҡрынлап, әммә ныҡышмалы рәүештә дошманды ҡыҫырыҡлауҙы дауам итте һәм 2 ғинуар кисенә Чернышкиға яҡынлашты (бында, күрәһең, Чернышки станцияһы күҙ уңында тотола, шул уҡ ваҡытта Чернышковский тигән ҡала ла була. - **Ред. иҫк.**). Башҡа дивизиялар менән бергә Башҡорт дивизияһы ла һөжүмгә күсте. Командирҙар үҙ эскадрондарын тәүәккәл һәм ҡыйыу рәүештә атакаға алып барҙы".

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *"Атай әйткән һүҙ закон" тигән тәртип тә ҡаты тотолдо беҙҙә. Был да ғаиләнең бер тотоп торор, бәләләрҙән аралар ҡурсауы бит инде. Атай оҡшатмағанды, атай риза булмағандайҙы ҡыланыуҙан алыҫ булырға тырыштыҡ.*



**Кешене кешелә нимә ҡыҙыҡһындыра? Уның йортомо, машинаһымы, йәки тышҡы ҡиәфәтеме? Юҡ, һис кенә лә улай түгел. Кешене, ғәҙәттә, икенсе кешенең ҡыҙыҡлы булыуы ҡыҙыҡһындыра. Эстәлекле, тәрән, фекерле, белемле булыуы. Әгәр әңгәмәсең шундай икән, уның ниндәй кейемдә һәм ҡиәфәттә булыуы хатта күҙгә лә ташланмай. Гәзит уҡыусыларыбыҙға тәҡдим итер шәхестәребеҙ Гөлназирә һәм Айһылыу ЙӘНТҮРИНАЛАР. Гөлназирә Сәфәрғәли ҡыҙы билдәле психолог, педагогия фәндәре кандидаты, ә уның һеңлеһе Айһылыу Сәфәрғәли ҡыҙы Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы белгесе, ул Швейцарияның Женева ҡалаһында йәшәй.**

**▸ Ҡыҙҙар, һеҙ ниндәй ғаиләлә үҫтегеҙ? Атай-әсәйегеҙ билдәле кешеләр, әммә уларҙың ғаиләлә үҙ балаларына булған мөнәсәбәтен, талаптарын, тәрбиәүи алымдарын беҙ белмәйбеҙ. Әйҙә, һөйләшеүҙе шуларҙан башлайыҡ?**

**Гөлназирә:** Кеше аҡылды һәм тәжрибәне уҡый-уҡый, йәшәй-йәшәй туплай, тиҙәр бит инде. Ә ҡайһы бер кешеләргә донъяуи аҡыл тәбиғәт тарафынан бирелә. Беҙҙең атай бына шундай шәхестәрҙең береһе. Ул хатта тыумаҫ

рҙар улар. Әйткәндәй, атайҙың ҡурайҙа уйнап, әсәйҙең йырлағанын Швецияла дискыға яҙҙырып, таныштарға бүләк иткәйнек. Иремдең өләсәһе, Францияның төпкөл ауылында йәшәгән 97 йәшлек әбей, көнө-төнө тик шул яҙманы ғына тыңлай. Ҡыҫҡыртып тороп ҡуя, һөҙөмтәлә бөтә ауыл ишетә. Ауылдаштары килеп, сәй эсеп, шул йырҙарҙы тыңлап ултырып та китә. Бик шифалы, яҡшы йоғонто яһай торған, йәнде дауалаусы моң был, тиҙәр. Мине күргәндә:

**әрләйбеҙ... Был нилектән, һеҙҙеңсә?**

**Гөлназирә:** Сикләнгәнлектән. Сағыштырыу булмағанлыктан, башҡа миҫалдарҙы белмәгәнлектән. Үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәп, үҙе кеүектәр менән генә аралашып, аң кимәле тик бер йүнәлештә генә үҫешкән әҙәмдәр үҙенә оҡшаштарҙы тәнҡитләп тик ултыра инде. Быны бөгөн интернет донъяһында ла күрәһегеҙ. Бер милләт кешеләре, бер төрлө эш өсөн яналар, әммә

**▸ Шәп ата-әсәләрҙең балалары булыу, шундай уңышлы ғаиләлә тыуып-үҫеү һеҙгә тормошта юл ярыуға ярҙам иттеме? Профессор атайығыҙ исеменә арҡаланған саҡтар булманымы ни?**

**Гөлназирә:** Атай-әсәйгә һалышыу тигәнде шул уҡ атай-әсәй үҙҙәре бала саҡтан уҡ башыбыҙҙан алып ташланы. Бик талапсан булдылар. Эшһеҙ йәйелеп ултырыу тигән нәмә хаҡында хыялланырға ла түгел ине. Китап уҡығанда ла тәгәрәп ятып булмай, уҡыйһың икән - өҫтәл артында ултырып ҡына.

Ҙур баҡса менән үҫтек, ул баҡсаның ҡара яҙҙан ҡыш башына тиклем эштәре балалар иненә лә ятты. Уҡыуҙа ла, шәхси үҫештә лә маҡсаттар ҡуйылып ҡына торҙо һәм беҙ, балалар, сабыш аттары һымаҡ шул бәйгелә һынатмаҫҡа ты-

йебеҙ өсөн атайҙан да шәп, атайҙан да аҡыллы, атайҙан да ғәййәр ир юҡ. Ул шулай тип уйлай, шуға инанып йәшәй. Үҙе шулай ҡабул иткән ирҙең эргәһендә ҡатын-ҡыҙ бәхетле була ла инде. Ә ҡатын-ҡыҙ бәхетле булғанда уның янындағы ир ҙә, балалары ла, хатта йорт хайуандары ла бәхетле була ул.

**Айһылыу:** Ир менән ҡатын араһында бөтөн төрлө хистәрҙе лә еңеп китә алған бер төшөнсә бар - бер-береңә тиң булыу. Рухи ҡиммәттәр менән, мөмкинлектәр менән, физик һәм биологик торош тар менән, аң кимәле менән. Беҙҙең атай-әсәй шулай бер-береһенә тиң кешеләр булып сыҡҡан. Һәм улар ана шул тиңлектәрен файҙалана белгән, файҙаланырға аҡылдары еткән. Шул уҡ ваҡытта бер-береһенә мөнәсәбәт өҫтөндә эшләгәндәр

# САҒЫШТЫРЫУҘАРҘА

## йәшәйеш аҡылы ла,

борон уҡ файҙа килтерә торған кеше икәнен асыҡлаған. Уның әсәһе - өләсәйебеҙ һуғыш мәле, аслыҡ заманда ырҙында эшләгәнендә итәге осона бер устай ғына бойҙай төрөп алып сығып тотола. Уны төрмәгә ултыртырға булып китәләр. Өйҙә ете бала ҡала. Эштәр ҙурға китеп барғанда ғына өләсәйебеҙҙең һигеҙенсе балаһына - атайыбыҙға ауырлы икәне асыҡлана ла, ауырлы ҡатын менән булышып тормаҫҡа булып, эште ябалар. Шунда өләсәй: "Минең был балам пракурыр булыр" - тигән. Йәнәһе, ҙур, данлы булыр, тигәнде әйткән инде. Һәм үҫкәндә лә уға: "Һин - ҡотҡарыусы, һин мине, туғандарыңды ҡотҡарып алып ҡалдың, һин шундай-шундай булырға тейешһең", - тип башына һеңдергән, юғары планка ҡуйған. Бына шундай фатиха менән атайыбыҙ үҫешкән дә инде. Ул тормошта һәр ваҡыт еңеүсе булды. Бында шулай уҡ уның әсәһенең дә йоғонтоһо ҙур булғандыр. Өләсәйебеҙ ҙә көслө рухлы, абруйлы әбей ине. Ауылда "Минһаж инәй нисек әйтә - шулай була", тигән төшөнсә йәшәне.

**Айһылыу:** Әсәйебеҙ ҙә бик үҙенсәлекле ул беҙҙең. Ябай ауыл ҡыҙы булһа ла, ул бөгөн дә ябай ер кешеһе кеүек түгел. Килен булып килгәнендә ул оло туғандарҙың нәҙек кенә, һары сәсле, төп-төҙ кәүҙәле булып иҫендә ҡалған. Шулай арҡаһын төҙ тоторға күнегеү өсөн ул йәш сағында башына "Һуғыш һәм солох" китабын ҡуйып, унар саҡрымға йәйәү бесәнгә йөрөгән. Әсәй менән атай икеһе лә спорт менән дуҫтар, улар ҡышҡы спортта ла, йәйге спортта ла призлы урындарҙан ҡалмайҙар. Әсәй мандолинала, атай ҡурайҙа уйнай. Әсәй бик моңло итеп йырлай ҙа, бейей ҙә. Бына шундай илһамлы, дәртле па-



энергияларын тик талаш-тартышҡа ғына сарыф итәләр. Сөнки уларҙың аң кимәле сикле.

Бер-береңә һоҡлана, күтәрә, ҙурлай белеү өсөн күңел киңлеге кәрәк. Икегеҙҙең дә, бишегеҙҙең дә бер ағас япраҡтары булыуығыҙҙы аңлау кәрәк. Йәғни, аҡыл кәрәк. Һин әллә ниндәй фәндәр бел, әллә күпме лозунгылар һөйлә, ә башҡаларҙы әрләйһең, хурлайһың, кәмһетәһең икән, тимәк, аҡылың үҫешмәгән. Белем менән аҡыл бергә

рыштыҡ. Тора-бара ошо туҡтауһыҙ ашмаҡәрлек итеү беҙҙең ҡанға һеңде һәм беҙ бөгөн дә һис кенә лә тик тора алмайбыҙ. Эшләмәй, ниндәйҙер бейеклектәр яуламай, алдыңа алынғанға өлгәшмәй, ынтылғанға барып етеүҙән ҡәнәғәтлек алмайса тора алмайбыҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә, беҙ яҡшы күнекмә алғанбыҙ, тормошҡа йәшәүсе итеп кенә түгел, ә көрәшсе, яулаусы итеп әҙерләп ебәрелгәнбеҙ.

ҙә. Бер-береңде хөрмәт итеп, бөтөн етешһеҙлектәре менән ҡабул итә белеп, кәмһетмәй, сикләмәй, баҫмай, күңелен төшөрмәй, уның ҡыҙыҡһыныуҙарын баһалап, көсө етмәгәндәй яуаплылыҡ һалмай йәшәй белеү ҙә үҙ өҫтөндә эшләй белеү күрһәткеселәр, тип уйлайым.

**Гөлназирә:** Башҡорт ғаиләләрендәге "атай әйткән һүҙ закон" тигән тәртип тә ҡаты тотолдо беҙҙә. Был да ғаиләнең бер тотоп торор, бәләләрҙән аралар ҡурсауы бит инде. Атай оҡшатмағанды, атай риза булмағандайҙы ҡыланыуҙан алыҫ булырға тырыштыҡ. Ябай һүҙ менән әйткәндә, әсәй-атайға, беҙ уларҙың икеһенә лә, унан ҡала тағы ла беҙ ике ҡыҙ өлкән ағайға буйһондоҡ. Ошондай мөнәсәбәттәр һаҡланды.

Атай менән әсәйҙең тышҡы ғына түгел, ә эске татыулыҡтары өйҙә гармония булдыра ине. Ғәйепле саҡта ла улар беҙҙе береһе әрләп, икенсеһе яҡламаны. Улар бер команда ине. Бына шундай өлгөлә үҫтек.

***Башҡортостанда институтта уҡығандан һуң мин сит илдәрҙә, сит милләттәр менән уҡыным. Беҙҙең халыҡта, әгәр беҙ сит халыҡ араһына сыҡһаҡ, юғалабыҙ, ситтәрҙе индерһәк, тарҡалабыҙ, тигән хата фекер бар. Әгәр ғаиләлә өйрәтелһә, ғаиләлә тотолһа, бөтөн был рухи төшөнсәләр, бер нәмә лә онотолмай ҙа, юғалмай ҙа. Ата-әсәһе туған телгә, үҙ халҡына һөйөү тәрбиәләй алмаған ғаиләләрҙә бөгөн "телһеҙ" балалар бихисап. Ә күпме халыҡтар донъя буйлап таралып та, милли рухтарын һаҡлап йәшәй. Тимәк, эш территорияла, сикләнгәнлектә, махсус программаларҙа һәм статустарҙа ғына түгел. Һүҙемдең нигеҙе, ниндәйҙер юғары һәм төплө белемгә өлгәшеү өсөн иң тәүгә башыңдағы һәм йәмғиәттәге сикләүҙәрҙе емереп сығырға кәрәк, тигәнгә ҡайтып ҡала.***

"Ҡасан әсәйегеҙ килеп, беҙгә концерт ҡуя?" - тип һорайҙар. Шулай итеп, французлар беҙгә ҡарап: "Бөтәһе лә йырлай, бейей, музыка ҡоралдарында уйнай. Бөтәһе лә уҡымышлы һәм белемле. Ул ниндәй халыҡ ул?" - тип аптырай. Ситтә йөрөгәс, мин бындай һүҙҙәрҙе йәһүдтәрҙән дә, немецтарҙан да, инглиздәрҙән дә ишеткәнем бар.

**▸ "Маҡтау" тигәндән, ошо һеҙҙең әйткәндәргә эйәреп, бына беҙҙе күптәр маҡтай ҙа, тиһегеҙ, ә үҙебеҙ ниңә маҡтай һалып бара торған халыҡ түгел икән? Беҙ бит күберәк**

үрелмәй тороп, әҙәмгә файҙа килтерә алмай.

**Айһылыу:** Көнләшеү тойғоһо һәр кемдә лә була. Тик ул хисте үҙеңә кәрәгенсә итеп ҡуллана белеү ҙә кәрәк. Кемдендер уңыштары һине көнләштерҙе икән, шуға ынтыл, маҡсат итеп ҡуй. Ә тик көнләшеп әрләп, ҡара яғып ҡына ултырып ҡалма. Кемгәләр йөҙ йыл көнләшеп ҡарарға ла була, унан һинең һаулығың ғына бөтәсәк. Йәки көнләшеүҙе инструмент итеп, шул кешенән дә юғарыраҡ ҡаҙаныштарға өлгәшергә лә мөмкин. Йәғни, бөтә тойғоларҙы ла файҙаға бороп ебәрергә була.

**▸ Атай-әсәйегеҙҙең ярты быуаттан ашыу татыу ғүмер итеүенең серен беләһегеҙме?**

**Гөлназирә:** Һәр кеме үҙ ролен теүәл башҡара белгәндән, тип уйлайым. Һәр икеһен айырым алып әйткәндә, әсәйебеҙ тәбиғи ҡатын-ҡыҙ аҡылына эйә булған ҡатын. Ул атай менән һәр ваҡыт уйлап, самалап, яйын табып ҡына һөйләшә белде. Хатта кәрәк урында, кәрәк ваҡытта, кәрәк интонацияны ла дөрөҫ һайлай ине. Мин быларҙы әлеге йәшемдән ҡарап, аңлап әйтәм. Быларҙы төшөнөү өсөн дә миңә ярайһы ваҡыт талап ителде. Һәм әсә-

**▸ Ата-әсәйегеҙ һеҙҙең оло тормоштағы һайлауҙарығыҙға йоғонто яһай алдымы? Мәҫәлән, Айһылыу, һеҙ атайығыҙға буласаҡ француз кейәүен нисек итеп алып килеп күрһәттегеҙ?**

**Айһылыу:** Бик еңел эш булманы был. Тотош стратегик план төҙөнөм. Башта ағайым һәм апайым менән таныштырҙым. Улар атай-әсәйҙе яйлап әҙерләне. Миңә ағайымдың ризалығы ла бик мөһим ине, унан ыңғай яуап алғас ҡына атайҙарға өндәшергә батырсылыҡ иттем.

Икенсе милләт, икенсе ил кешеһе менән ғүмер итеү - ул бер-береңдең хистәрен генә

***✓ Беҙҙә ир-егеттәр шашып киткән, тип йомшаҡ итеп әйтәйек. Ҡатын-ҡыҙҙы үҙ шәхси милкең итеп ҡарау, туҡмау, кәмһетеү, уға ғаилә проблемаларын йөкмәтеп ҡуйыу сит илдәрҙә закон тарафынан эҙәрлеклнә.***



ҡабул итеү түгел, ә бер-берендең мәҙәниәтен, менталитетын, йәшәү рәүешен дә ҡабул итеү ул. Кешеләр бер милләттән булып та эт менән бесәй һымаҡ йәшәп ҡуя. Бер ҡәүемдә үҫеп тә аңлаша алмай, балаларын етем итә. Башҡорт ғаиләләрендә лә телһеҙ, моңһоҙ маңҡорттар үҫә. Миҫалдар ян-яҡ тулы. Шунлыҡтан, кешенең кеше булыуын уның милләте генә түгел, ә тәрбиәһе лә, аңы ла һәм башҡа күп кенә факторҙары ла хәл итә. Миңә сит илдә башҡорт булыуға бер кем дә ҡамасауламай. Минең ғаиләмдә мине башҡорт тип беләләр, минең телемде, мәҙәниәтемде хөрмәт итәләр. Милләттәштәрем менән осрашыуым, һабантуйҙар үткәреүебеҙ минең ғаиләләгеләр өсөн дә байрам. Һәм минең ошо тулы ҡанлы, үҙем теләгәнсә, үҙ рухыма ярашлы булғанса йәшә-

шарттарҙа йәшәнем: икмәк алам тиһәң, һөткә аҡса юҡ, һөт алам тиһәң, икмәккә етмәй. Шуға мандарин ала ла, көнөнә бер (!) мандарин ашап, йән аҫрай инем. Телде белмәйем. "Һаумыһығыҙ", "хуш булығыҙ" тип кенә әйтә алам, ә лекциялар тик инглиз телендә генә. Донъя иҡтисады, бухгалтер учеты, логистика кеүек предметтарҙы төрлө илдәрҙән килгән, һәр береһе үк акценты менән булған уҡытыусылар уҡыта. Унда мин кемгәлер төбәп бармағанмын, таныштарым юҡ. Күтәрә алмаҫтай, йығып сығып булмаҫтай хәлдәр кеүек. Тик мин үҙемде ҡулға алдым, килгәнһең, башлағанһың икән, аҙағынаса ет, тинем. Көн дә иртәнсәк тороп, ун саҡрымға йүгерҙем, һалҡын душ ҡабул иттем һәм бәләкәс кенә бүлмәмдә тел өйрәнергә ултырҙым. Лекцияларға

яһаны. Шунан һуң был университеттағы күп уҡытыусылар коридорҙа минең менән ҡул биреп күрешер булдылар.

Мин быларҙы ниңә һөйләйемме? Дисциплина тигән нәмәнең ниндәй көскә эйә булыуын күрһәтеү өсөн. Ғаиләмдә алған тәртип һәм эшкә яуаплы ҡарай белеү, рухи көс, физик әҙерлекле булыу һәм шуларҙы көн һайын да үтәй барыу миңә уңыштар килтерҙе. Быны һәр беребеҙ эшләй ала.

**Айһылыу, беҙҙекеләр менән сағыштырғанда, сит ил ҡатын-ҡыҙҙары йәшәйешендәге күҙгә ташланған айырмалыҡтарҙы әйтеп китегеҙ әле?**

**Айһылыу:** Айырмалыҡтар ҙа, шул уҡ ваҡытта оҡшашлыҡтар ҙа етәрлек. Ыңғай фекерләй белеү өсөн иң башта айырмалыҡтарҙы түгел, ә оҡшашлыҡ-

Эшләп йөрөгән ҡатын-ҡыҙ иһә артыҡ биҙәнеп-төҙәнмәй, уңайлы кейем, яҡшы һәм дөрөҫ туҡланыу, спорт менән шөғөлләнеү уларҙың тормош девизы.

Унда тағы ла кешеләрҙең бер-береһенә булған мөнәсәбәте лә күпкә мәҙәнилерәк. Мәҫәлән, берәй пар айырылышты икән, уртаҡ балалары менән аралашҡанда улар бергә лә йөрөргә, хатта икенсе парҙары менән ҡушылып йөрөргә лә ризалар. Бер бала арҡаһында ике яңы ғаилә бер-береһен хөрмәт итеп аралашып йәшәп ятырға мөмкиндәр.

Ике кеше ғаилә ҡора икән, улар икеһененең дә ҡыҙыҡһыныуҙарын, эшен һәм башҡа шөғөлдәрен уртаға һалып һөйләшеп аңлаша. Мәҫәлән, ир кеше ниндәйҙер көндө балыҡҡа йөрөй, ҡайһылыр мәл дуҫтары менән осраша, футболға

маҫҡа өйрәтәләр. Уҡытыусыға, полицияға йәки башҡа орган хеҙмәткәрҙәренә лә бәләкәйҙән үҙ хоҡуҡтарын белеп мөрәжәғәт итеү мәҙәниәте ныҡ үҫешкән. Йәмғиәт тә баланы үҙ тиңе итеп ҡарай.

Тағы ла унда ҡатын-ҡыҙҙарға хөрмәт ҙур. Уларҙың хоҡуҡтары яҡшы һаҡлана. Беҙҙә ир-егеттәр шашып киткән, тип йомшаҡ итеп әйтәйек. Хатта ҡырағайҙарса тәбиғи инстинкттар менән генә йәшәйҙәр, тиергә лә була. Ҡатын-ҡыҙҙы үҙ шәхси милкең итеп ҡарау, туҡмау, кәмһетеү, уға ғаилә проблемаларын йөкмәтеп ҡуйыу сит илдәрҙә закон тарафынан эҙәрлекләнә. Был тәртиптәрҙе ир-егеттәр күптән инде яҡшы һеңдергән һәм ҡанундарҙы тик енәйәтсе булғандар ғына боҙа. Ә беҙҙә, үкенескә ҡаршы, ҡатын-ҡыҙҙың хәле көнләшерлек түгел.

# ТЫУА ХӘҠИҠӘТ ТӘ...

## матур мөнәсәбәттәр ҙә

үемдә атай-әсәйем белеп-күреп тора. Улар ҙа беҙҙең миҫалдарҙа кешеләрҙең кешелеген милләткә генә ҡарап түгел, ә эске булмышына ҡарап баһалап өйрәнде.

**Ҡыҙҙар, һеҙ бөгөнгө өлгәшкән халәтегеҙгә етеү өсөн ниндәй юл үттегеҙ? Уҡыныңыҙ, эшләнегеҙ, шөғөлләндегеҙ...**

**Гөлнәзирә:** Башҡортостанда институтта уҡығандан һуң мин сит илдәрҙә, сит милләттәр менән уҡыным. Беҙҙең халыҡта, әгәр беҙ сит халыҡ араһына сыҡһаҡ, юғалабыҙ, ситтәрҙе индерһәк, тарҡалабыҙ, тигән хата фекер бар. Әгәр ғаиләлә өйрәтелһә, ғаиләлә тотолһа, бөтөн был рухи төшөнсәләр, бер нәмә лә онотолмай ҙа, юғалмай ҙа. Ата-әсәһе туған телгә, үҙ халҡына һөйөү тәрбиәләй алмаған ғаиләләрҙә бөгөн "телһеҙ" балалар бихисап. Ә күпме халыҡтар донъя буйлап таралып та, милли рухтарын һаҡлап йәшәй. Тимәк, эш территорияла, сикләнгәнлектә, махсус программаларҙа һәм статустарҙа ғына түгел. Һүҙемдең нигеҙе, ниндәйҙер юғары һәм төплө белемгә өлгәшеү өсөн иң тәүҙә башындағы һәм йәмғиәттәге сикләүҙәрҙе емереп сығырға кәрәк, тигәнгә ҡайтып ҡала. Мин, мәҫәлән, психология һәм йога буйынса Филиппин утрауҙарында, Швейцарияла, Һиндостанда, Ҡытайҙа, Болгарияла, Польшала уҡыным һәм оҫталар ҡулында шөғөлләндем. Ошо әҙерлеккә ун йылдан ашыу ғүмеремде бирҙем. Бары шунан һуң ғына, эҙләгәнемдең инешен тапҡас ҡына, бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар өсөн консультациялар үткәрә алам.

**Айһылыу:** Швейцарияға уҡырға барғас, мин шундай

йөрөнөм, тырышып-тырышып һөйләштем һәм хатта бөтөн башҡа ҡыҙыҡһыныуҙарҙан, аралашыуҙарҙан тулыһынса сикләндем. Илемде лә, рус һәм башҡорт телле дуҫтарымды ла, телефонды ла оноттом. Туғандарға ғына имен икәнемде яҙып ебәрәм дә - бөттө. Алдыма маҡсат ҡуйып, тик уға ғына төбәп барҙым. Ун ике айҙан дипломымды иң юғары балға яҡлап сыҡтым.

тарҙы күрә беләйек, тип әйткәйнем инде. Башта бер ҡыҙыҡ ҡына нәмәне әйтеп үтәйем. Эш буйынса төрлө илдәрҙә, шул иҫәптән бик ярлы илдәрҙә лә булырға тура килә. Һәм мин күргән иң бәхетле кешеләр, һәр хәлдә, үҙҙәрен бәхетле тип һанаған кешеләр, шул яҡтарҙа осраны. Улар Алланың ғүмер биргәненә һәм ошо яҡты көндә ашар, кейер нәмәләре булыуға ла риза булып, артығын дауламай йәшәй беләләр. Йәшәүҙең бер фәлсәфәһен төшөнгән, ризаһ-



***Кешеләр бер милләттән булып та эт менән бесәй һымаҡ йәшәп ҡуя. Бер ҡәүемдә үҫеп тә аңлаша алмай, балаларын етем итә. Башҡорт ғаиләләрендә лә телһеҙ, моңһоҙ маңҡорттар үҫә. Миҫалдар ян-яҡ тулы. Шунлыҡтан, кешенең кеше булыуын уның милләте генә түгел, ә тәрбиәһе лә, аңы ла һәм башҡа күп кенә факторҙары ла хәл итә. Миңә сит илдә башҡорт булыуға бер кем дә ҡамасауламай. Минең ғаиләмдә мине башҡорт тип беләләр, минең телемде, мәҙәниәтемде хөрмәт итәләр. Милләттәштәрем менән осрашыуым, һабантуйҙар үткәреүебеҙ минең ғаиләләгеләр өсөн дә байрам. Һәм минең ошо тулы ҡанлы, үҙем теләгәнсә, үҙ рухыма ярашлы булғанса йәшәүемде атай-әсәйем белеп-күреп тора. Улар ҙа беҙҙең миҫалдарҙа кешеләрҙең кешелеген милләткә генә ҡарап түгел, ә эске булмышына ҡарап баһалап өйрәнде.***

Ҡабул итеү комиссияһы хатта был хеҙмәтте үҙем яҙғаныма шик белдереп, саҡыртып алды, "Дөрөҫөн әйтһәгеҙ, ғәфү итәбеҙ" тинеләр. Мин "Был хеҙмәттәге һәр һүҙ өсөн яуап бирә алам", тинем һәм шулай иттем дә. Бер бик талапсан уҡытыусы һәр бер һанды тикшереп, һорауҙар менән күмеп ултырҙы. Бынан бер йыл элек кенә телһеҙ булған студенттың бөгөнгө күренеше уны һәм башҡаларҙы ла аптыратты, әлбиттә. Иң аҙаҡтан был профессор тороп, ҡулымды ҡыҫты ла: "Минең улым бар, бәлки, һин беҙҙең ғаилә менән танышырһың?" - тигән тәҡдим

ыҙлыҡ, нәфсе менән ағыуланмаған йәндәр. Мин уларға ысынлап көнләшеп ҡараным.

Һорауға килгәндә, сит илдә, мәҫәлән, Францияла, Швейцарияла ҡатын-ҡыҙҙың оло йәштәгеләрен айырып әйтеп китер инем. Бына унда матурлыҡ салонына барһаң, тик әбейҙәр ултыра. Улар тырнаҡ эшләтә, макияж һылата, сәсен буята йә бөҙрәләтә. "Әбейҙәр" тип әйтеү ҙә килешмәй хатта. Беҙҙә апайҙар 55-60-тан үтһә, үҙҙәренә ҡул һелтәй, ә француженкалар киреһенсә ҡылана. Ашауҙарын, кейенеүҙәрен, сәләмәтлектәрен ҡайғыртыуға күсәләр.

бара, спорт менән шөғөлләнә. Ҡатыны, мәҫәлән, айырым бер ваҡытта фитнесҡа китә, бер мәлдә әхирәттәренә бара, ата-әсәһен ҡабул итә һәм тағы ла ниндәйҙер эштәре бар. Бала буйынса ла шулай яуаплылыҡтар тәртип буйынса һалына. Ғәҙәттә уларҙа шулай. Ә беҙҙә ғаилә ҡороу ул, тимәк, бер-береңә хужа булыу, бер-береңде сикләүгә, баҫыуға ҡайтып ҡала ла, аңлашмаусанлыҡтар сыға.

Балалар тәрбиәләүгә килгәндә, уларҙы сикләү һәм баҫыу юҡ. Киреһенсә, ирекле фекерләргә, уй-ниәттәрен әйтә белергә, теләктәренән оял-

Һанай китһәң, күп улар. Мин үҙ илемде, республикамды, милләтемде бер ҙә кәмһетеп әйтмәйем, бары күҙгә ташланған сағыштырыуҙар ғына былар. Тағы ла беҙҙәге бысраҡлыҡ, юлдарҙағы, урамдарҙағы, ҡала ситтәрендәге тәртипһеҙлек, тәбиғәткә һаҡһыҙ ҡараш ныҡ күҙгә ташлана. Былар өсөн ысынлап оят.

**Гәзит уҡыусыларға бирергә теләгән кәңәштәрегеҙ?**

**Гөлнәзирә:** Мин кәңәштәремде интернеттағы һәр сығышымда бирәм. Ғүмерҙе бушҡа, кемгәлер арнап, кемдәндер ҡурҡып, идеяларға табынып үткәрмәгеҙ. Уҡығыҙ, белегеҙ, төрлө яҡлап үҫешегеҙ. Эске донъяғыҙҙы ғәйбәт, көнсөллөк, тәнҡит кеүек ҡаралыҡ менән тултырмағыҙ. Яман кешеләр менән аралашмағыҙ. Асыҡ булығыҙ, аңлайышлы булығыҙ, маҡсатлы булығыҙ.

**Айһылыу:** Тәртип менән йәшәп өйрәнегеҙ. Ҡыҙыҡһыныуҙар менән. Бөтөн нәмәлә лә сама белегеҙ: ашауҙа, йоҡола, ратыуҙа, аралашыуҙа, хәбәрҙә. Башҡаларҙың ҡылығы, эше, уңыштарына ҡыуана, һоҡлана белегеҙ. Яҡшы һүҙҙе үҙегеҙ башлап әйтегеҙ һәм донъя ла һеҙгә йөҙө менән боролор. Был тәбиғәт ҡануны һәм кешелектеке лә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошондай һөйләшеүҙәрҙән һуң оҙаҡ ҡына шул ыңғай тулҡында йөрөйһөң. Аралашҡан кешеләрендән алған яҡты энергия, позитив фекерләү ағымында булаһың. Ысынлап яҡшы тәьҫир итә улар. Һәм ошондай кешеләр күберәк булһа икән, тип уйлайһың. Эшлекле, энергиялы, алға хәрәкәт итә белгән, уңыштарға өлгәшкән һәм үрнәк була алған кешеләр.**

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА әңгәмәләште.**

***✓ Үкенескә ҡаршы, ошондай сараларҙа үҙ белдеге менән сығыш яһарға ынтылыусы ла табылмай. Был бит һәлкәүлек, ҡыйыуһыҙлыҡ билгеһе һәм авторҙарҙың ошо уҡ сифаттары әҙәбиәттә лә сағылыш таба.***



КӨНАУАЗ

**Үткән аҙна аҙағында, 27-28 май көндәре, Өфөлә "XXI быуат яҙыусыһы" төбәк-ара форумы үтте. БР Яҙыусылар союзы, Республика Хөкүмәте һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы берлегендә ойошторолдо сара. Унда барлығы йөҙҙән ашыу яҙыусы ҡатнашты. Иң башта форумдың иҫтәлекле һәм мәртәбәле өлөшөн - ҡотлауҙарҙы билдәләп үтәйек. Барыһы өсөн дә хөрмәтле яҙыусыларыбыҙ Ноғман Мусин менән Рәшит Шәкүрҙең хеҙмәте баһаланыуы ҙур шатлыҡ булды. Яҙыусы, шағир, профессор Рәшит Шәкүргә - Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусинға Халыҡтар дуҫлығы ордены тапшырылды. Артабан яҙыусы-сатирик Марсель Сәлимов һәм яҙыусы, Халыҡ-ара славян яҙмаһы мәҙәниәте фондының вице-президенты, Аксаков фонды президенты Михаил Чванов Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы исеменә лайыҡ булды. Яҙыусы Әмир Әминевҡа, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Ҡәҙим Аралбаевҡа, Марат Кәримовҡа Салауат Юлаев ордендары тағылды.**



# XXI БЫУАТ ЯҘЫУСЫҺЫ.

## Кем ул, нимә яҙа?

Сараның беренсе көнөндә "Китаптарҙы цифрлы мөхиттә алға этәреү", "Нәшриәт йортоноң трендтары һәм тенденциялары" һәм "Әҙәби тәнҡит" темаларын яҡтыртҡан секциялар эшләне. Бында яҙыусылар үҙ ҡыҙыҡһыныуҙары һәм ижади йүнәлештәре буйынса бүленеп фекер алышты. Икенсе көн дә секция ултырыштары дауам итте һәм уларҙа "Башҡортостандағы бөгөнгө балалар-үсмерҙәр әҙәбиәтенең хәле һәм перспективалары", "Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендәге тәржемә эшмәкәрлеге" һәм "Заман драматургияһы йәки уныңсы спектакль рецебы" тураһында лекция тыңланды, һораулырға яуаптар бирелде. Спикерҙар итеп ситтән ҡунаҡтар, мәҫәлән, Мәскәүҙән "ЛитРес"тың комьюнити-менеджеры Полина Воронина, шулай уҡ баш ҡаланың "Вече" нәшриәтенең баш редакторы урынбаҫары Виктор Ильин, әҙәби тәнҡитсе, яҙыусы Михаил Хлебников, шағир, тәржемәсе, Ярославль өлкәһенең яҙыусылар союзы рәйесе Мамед Халилов, шағирә, "Таңсулпан" ҡумыҡ әҙәби журналы редакторы Супиянат Мамаева һәм драматург, "Заман драматургияһы" журналының баш редакторы Родион Белецкий саҡырылғайны.

Ике көн дауамында барған сағыу һәм шау-шыулы сараның күңелдәргә хуш килер өлөштәре етерлек булды, бында халыҡ рәхәтләнеп аралашты, күреште, ҡотлашты, бергәләп фотоларға төштө. Әммә был форум ине һәм уның маҡсаты байрам яһауҙан бигерәк, эшлекле тәҡдимдәр, идеялар булдырыу, шулар нигеҙендә килешеүҙәр төҙөү. Секция ултырыштары ла шым ғына ултырып сығыу өсөн ойошторолмай, уларҙа фекерләшеү, үҙенең һәм башҡалар миҫалын ишетеп-ишетерел сағыштырыу, аңлашылмағандарын асыҡлау кеүек тере аралашыу мөһим. Һуңғы ваҡыттарҙа республикала уҙған бернисә форумды күҙәтеү барышынан шундай һығымта яһала: беҙгә эшлекле була белеү үҙенсәлеге етешмәй. Яңы ғына фойела ҡысҡырып һөйләшкән, көләшкән халыҡ етди эш мөхитендә бөтөнләйе менән юҡҡа сыға ла ҡуя. Был бигерәк тә электрон китапханалар, әҙәбиәттең цифрлы форматына күсеү, әҙәбиәтте интернет аша пропагандалау, тәржемә мәсьәләһе тураһындағы һөйләшеүҙәрҙә һиҙелде. Ә, бәлки, уртаса йәше 60-тан юғары булған яҙыусылар өсөн был темаларҙы һөйләп тороу ҙа урынһыҙҙыр? Һәм ошо урында форумдың "XXI быуат яҙыусыһы" тип аталыуы ла иҫкә төшә... Һәм яуап та үҙенән-үҙе килә: яҙырын яҙып, халыҡҡа сығарған һәм исем-абруй яулаған хөрмәтле оло яҙыусыларыбыҙға был темалар кәрәк тә, ҡыҙыҡ та түгел. Ә йәшерәктәр, ни эшләптер, сәмләнмәй, дәрләп китмәй. Быны улар бөгөн дә интернетҡа бик һөйкөмлө итеп матур фотолар ҡуя, әммә береһе лә: "Мин шундай тәҡдим менән барҙым форумға, шундай мәсьәләне күтәрҙем йәки һорау бирҙем", - тип яҙмай. Үкенескә ҡаршы, башҡорт интеллигенцияһы араһында ошондай сараларҙа үҙ белдеге менән сығыш яһарға ынтылыусы ла табылмай. Бигерәк тә йәштәрҙән. Был бит һәлкәүлек, ҡыйыуһыҙлыҡ, баҙнатһыҙлыҡ билгеһе һәм авторҙарҙың ошо уҡ сифаттары әҙәбиәттә лә, уларҙың ижадында ла сағылыш таба. Шунан тыуа депрессив геройҙар, улар үҙ-үҙенә ҡул һала, тормошҡа яраҡлаша алмай, әсәләр, ҡатындары хыянат итә... Уны барыһы ла ҡыйырһыта, уны йәмғиәт аңламай, әммә уның күңеле матур, һин уны ярат инде, уҡыусы. Шулаймы? Әммә уҡыусыға бөгөн бындай герой кәрәкмәй. Ул уларҙан ғарыҡ булған. Бөгөнгө уҡыусыға әҙәби мәғәнәләге генә түгел, ә туранан-тура мәғәнәләге геройҙар - эшлекле, уңышлы, үрнәк алырҙайҙар, ниндәй хәлдә лә рух көсөн юғалтмай, барыһын йырып сыға ала торған, ғорурлыҡ уятырҙай, йөрәктә сәм, күҙҙәрҙә осҡон тоҡандырырҙайҙар тураһында уҡыу зарур. Әҫәр уҡыусыны өмөтһеҙлеккә этәрмәһен ул. Уның идея-тематикаһы ыңғай тәрбиәләһен, аң өсөн файҙалы булырҙайҙы пропагандалаһын, герой ҡуя алдында үсеш кисерһен. XXI быуат яҙыусыһы кем ул, нимә яҙа, тигән һорау тыуғанда китаптарҙың тышы менән генә түгел, ә эстәлеге менән дә маҡтанырлыҡ булһын. Донъяны яҡшыраҡ күҙәтәйек, йәш быуындың амбицияларын аңлай беләйек, заман менән бергә атлайыҡ, хөрмәтле ҡәләмдәштәр, тип әйтке килә форумда алған кисерештәрҙән һуң.

Бөгөнгө заман талабы булған электрон китапханалар һәм цифрлы форматтағы китаптар, интернет әҙәбиәте хаҡында ла айырым әйтеп китеү, был темаға хатта форумдан тыш, тораҡ тағы ла айырым һөйләшеү итеп ойошторорға ла кәрәк булыр. Сөнки әлеге мәлдә уҡыусыбыҙҙың ҙур өлөшөн интернет аралашыу ялмап алған. Улар шул интернет ҡыҙығынан айырылып, беҙҙең китаптарҙы эҙләп килмәҫе көн кеүек асыҡ хәҙер. Беҙ үҙебеҙ уларға шул интернет аша сығырға, әҫәрҙәрҙе тәҡдим итергә тейеш. "Беҙҙе уҡымайҙар" тип үпкәләп ултырыу урынһыҙ. Үҙебеҙ уҡыусыны табырға һәм ҡыҙыҡһындырырға бурыслы. Бөгөн популярлыкты һәм уҡыусы һөйөүен нәшриәт йәки Яҙыусылар ойошмаһы йүнләшә икән, тип уйлау төптө хата. Ундай замандар үтте. Әммә был сифатһыҙ һәм әҙәбиәт ҡанундарын тотмаған әҫәрҙәр, яҙмалар менән интернетты тултырыу тигәнде лә аңлатмай. Буласаҡ электрон китапханала һәм китап магазинында Яҙыусылар ойошмаһының ентекле тикшереүен үткән әҫәрҙәр генә ҡуйылырға тейеш. Һәм, иң мөһиме, электрон китап магазинында әүҙем эшләтергә, авторҙарға гонорар түләргә, уларҙы рекламаларға кәрәк.

Эйе, форумда Мәскәү "ЛитРес"ы белгесе лә китаптарҙы уларҙың электрон китапханаһына ҡуйырға саҡырҙы. Әммә шул уҡ урында был китапханаға 19 баҫмаһын ҡуйған һәм уҡыусы таба алмаған автор ҙа сығыш яһаны. Бында сәбәп нимәлә, тигән һорау тыуа. Сәбәп, моғайын, башҡорт яҙыусыһының башҡорт донъяһын яҙыуындалыр. Һәм был донъя башлыса ил халҡына ҡыҙыҡ түгел. Башҡорт әҙәбиәтенең үҙ менталитеты бар, уның фәлсәфәһе барыһы өсөн дә тәғәйен түгел. Һәм беҙ бөгөн бер нисек тә барыһына ла ярарға, оҡшарға тырышырға, милли колоритты юғалтырға, милләтһеҙ-ерлекһеҙ әҙәбиәткә әйләнергә тейеш түгел. Бөгөн былай ҙа артыҡ дөйөмләштереү, милләтһеҙләштереү, хатта енесһеҙләштереү пропагандалана. Шунлыҡтан, иң беренсе беҙгә үҙебеҙҙә булған айырым электрон китапханалар, сауҙа үҙәктәре кәрәк. "ЛитРес"та, спикер үҙе лә әйтеп тороуынса, фэнтези һәм детектив жанрҙар өҫтөнлөк ала. Ә беҙҙең әҙәбиәттә был жанрҙар үҫешмәгән, булғанда ла ике-өс кенә авторҙы төртөп күрһәтергә мөмкин. Ошо тәңгәлдә, яҙыусылар форумында китап һатыу йә күргәҙмә ҡуйыу ҙа булмағанын һыҙыҡ өҫтөнә алып китәйек. Күрәһегеҙ, заманса эшләй белеүгә өйрәнергә лә өйрәнергә әле беҙгә.

Дөйөм алғанда форум күптән күрешмәгән һәм ошондай аралашыуға һыуһаған яҙыусылар өсөн бер байрам булды. Ойоштороу ҙа яҡшы кимәлдә ине: ситтән килгәндәр "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында йәшәне, туҡланыу, концерттар, ҡыҙыҡлы һәм белемле спикерҙар, бихисап ҡотлауҙар. Һәм, әлбиттә, иң мөһим өлөш - республика Башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров менән осрашыу. Башлыҡ яҙыусыларға түбәндәге хәл ителәсәк эштәр теҙмәһен аңлатты:

- Башҡортостанда китаптар нәшер итеүгә финанс ярҙам арттырыласаҡ. Нәшриәтселәр, яҙыусыларға тәғәйенләнгән гонорарҙан тыш, китап һатыуҙан килгән килемдең 20 процентын авторҙар иҫәбенә күсерәсәк.
- Әҙәбиәтте популярлаштырыу өсөн йыл һайын китап йәрминкәһе ойоштороу тураһында хәл ителгән. Ул Өфө майҙандарының береһендә үтәсәк. Бынан тыш, башҡорт яҙыусылары китаптарын Рәсәй кимәлендә һатыуға сығарыу тураһында килешеүҙәр алып барыла.
- Башҡортостандың һанлы үҫеш министрлығына электрон платформа әҙерләү бурысы ҡуйыла. Унда республика яҙыусыларының әҫәрҙәре, шул иҫәптән аудиокитаптар ҙа һанлы форматта урынлаштырыласаҡ.
- Тәржемәселәр өсөн дөйөм суммаһы 3 млн һум күләмендә грант булдырыласаҡ.
- Пушкин урамында Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының буш торған бинаһын заманса мәҙәни үҙәк итеп үҙгәртеү ҡарала. Унда әҙәби ҡунаҡхана, "Китап" нәшриәте экспозицияһы, башҡа ижади берекмәләр урынлашасаҡ.
- Киләһе йыл заманса кимәлдәге Евразия китапханаһын проектлау эшенә тотоноу ниәтләнә. Уны Республика Йорто менән ветерандар госпитале араһындағы буш урында төҙөү күҙаллана.

Бына шундай киләсәккә ышаныс һәм өмөт бирҙе ҡәләм тирбәтеүселәргә етәкселек. Республикабыҙҙа үткән тәүге Яҙыусылар форумы тарихта үҙ эҙен ҡалдырыр һәм матур заманса башланғыстарға старт бирер, тип ышанайыҡ.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# ОЙОТҠАН ТӘМЛӘЙБЕҘ

*Сәхнәлә йәмле аҡлан, экранда йә төпкөүәлдә (задник) тәбиғәт күренеше.*

*Ҡурайсы донъяһын онотоп ҡурай уйнап ултыра.*

*Умартасылар ҡорт ҡарай. Ҡорттар геүләшә.*

*Ҡурай моңо тарала. Ҡурайсы үҙе лә күренә. Алып барыусы сыға.*

**Алып барыусы:** Беҙҙең төбәк үҙенең аҫыл тәбиғәте, эшсән халҡы, дәртле бейеүселәре менән дан тота. Ҡурайсылары моңло көйҙәр бағышлай, дәртле көйҙәр һыҙҙыра. Ә солоҡсолары өсөн иң матур көй - бал ҡорттарының геүләүе. Ана бит, ҡурайсы умартасының да күңелен күтәреп китмәк, ҡалай өҙҙөрөп тарта көйгенәһен!

*Ҡурайсыны ҡорт саға. Ыуаланып ултыра, саҡҡан урыны шешә.*

**Алып барыусы:** Саҡты мәллә?
**Ҡурайсы:** Саҡты! Ҡорт саҡты!
**Алып барыусы:** Ай әттәгенәһе! Ҡатыҡ кәрәк, ҡатыҡ! Ойотҡан кәрәк!
**Ҡурайсы:** Ҡуй, бушты һөйләмәгеҙ әле.
**Алып барыусы:** Улай тимә! Ойотҡан, йәғни ҡатыҡ бик килешә ул ҡорт саҡҡанда... Ана, бөгөн ауыл ағинәйҙәре "Ҡатыҡ тәмләү"гә йыйыла, йүгер тиҙерәк шунда.
**Ҡурайсы:** Былай ҙа улар мине көтә, бейетеп китерһең, тип саҡырғайнылар!

*Музыка. Ҡурайсы ҡорт саҡҡан ерен тотоп сығып йүгерә.*

**Алып барыусы:** Беҙҙең яҡта халыҡ яҙғы-йәйге йолаларҙы ихлас тота шул. Шуларҙың береһе - "Ойотҡанға саҡырышыу" йәки "Ҡатыҡ тәмләү". Ҡатыҡты беҙҙең яҡта "ойотҡан", тиҙәр. Ойотҡан ойотоу серҙәре беҙҙә көтгү үтәлә, иң тәмле ойотҡан яһаусылар ашһыу оҫтаһы булып танылa. Башҡорттарҙың милли ашы - ойотҡан йәки ҡатыҡ, танһыҡ һәм файҙалы ашамлыҡ ҡына түгел, дауа булып тора. Яҙғы һөттөң яңы артып, йәшел үлән тәме әйтә торған мәлендә ойотҡан әҙерләнә. Йәй башында үлән ҡеүәте артһа, ҡатыҡ уғата ныҡ тәмләнә, уға ер көсө инә, тиҙәр. Ҡатыҡ тәмләшергә бөгөн беҙҙең ауыл ағинәйҙәре йыйылған.

*(Уға ҡаршы ағинәйҙәр сыға.)*

**Беренсе ағинәй:** Бына минең ойотҡанымды тәмләп ҡарағыҙ!
**Алып барыусы:** Аш башы - эш башы! Тәмле хуш еҫе бар ойотҡанындың.
**Беренсе ағинәй:** Еләк, сейә буталған ҡатыҡ был - йогурт. Сейә һалып буталған ҡатыҡ бик файҙалы һәм тәмле була. Ҡатыҡ өсөн һөт ҡайнап сыҡҡас, уға тау сейәһенең ботаҡтары, япраҡтары тығып ҡуйыла. Шул килеш һыуына төшкәс, ойомос һалына. Иҫ киткес хуш еҫле тәме ҡала. Сейә тәме ҡоротҡа ла күсә. Ҡатыҡтан сейә япрағы аҙаҡ алып ташлана. Йөгеҙ, тәмләгеҙ!
**Икенсе ағинәй:** Ҡатыҡҡа тәбиғи тәмләткестәр ҙә ҡушыла, тик еләк, ҡарағат, сейә, әберсә, йәғни ҡурай еләге япраҡтарын өҫтәгәндә сама белеү кәрәк. Мин еләк һалып ойоттом әле, тәмле булғандыр! Йөгеҙ, рәхим итегеҙ.

*Ҡатыҡ тәмләшәләр, йыр-таҡмаҡ.*

**Икенсе ағинәй:** Яҙғы ҡатыҡ, ярыҡ ҡашыҡ - улым менән киленемә, көҙгө ҡатыҡ, көмөш ҡашыҡ - ҡыҙым менән кейәүемә, тигән халыҡ әйтеме. Халыҡ белмәй әйтәме ни, ҡатыҡ - аш-һыуҙың иәме!
**Өсөнсө ағинәй:** Йыуа, һуған, йомортҡа һалынған ҡатыҡ - һыуыҡ аш - окрошка.

Йыуаны йәки һуғанды ваҡ ҡына итеп турайбыҙ. Бешкән йомортҡаны эре киҫәктәргә ҡырҡабыҙ. Самалап тоҙ, борос ҡушабыҙ. Ҡатыҡҡа һалып болғайбыҙ. Тәмлеме? Әх, тәмле!



*Ҡурайсы килеп етә. Уның бите шешеп сыҡҡан. Ауыҙы ҡыйыш.*

**Беренсе ағинәй:** Әһә, ҡурайсы ла килгән байрамға! Ойотҡан бик тәмле, рәхим ит.
**Икенсе ағинәй:** Ҡурайсыға ниҙәр булған, ҡурайсыны ҡорт саҡҡан! Ирендәре салышайған, биттәре шешеп сыҡҡан!
**Беренсе ағинәй:** Бәй, ҡорт саҡһа, ҡатыҡ һөрт, хәҙер шеше ҡайта бит! Ҡатыҡ һөрт!
**Икенсе ағинәй:** Бында кәрәк әсе ҡатыҡ, кил, үҙем әсе ҡатыҡ һөртәм!

*Ҡурайсының битенә ҡатыҡ һөртә.*

**Беренсе ағинәй:** Әсе ҡатыҡты һөртөрһөң, сөсө ҡатыҡты тәмләрһең. Шунан ҡурай уйнап байрамды йәмләрһең! Матур-матур һауыттарға һалып әҙерләп ҡуйҙыҡ ойотҡанды, һайлап тәмләп сыҡ.

*Уға бер-бер артлы ҡатыҡ тәҡдим итәләр. Ҡурайсы ҡуйылған ҡатыҡтарҙы тәмләй. Һәр хужабикә үҙенең ҡатығын маҡтай.*

**Ҡурайсы.** Былдай тәмле ҡатыҡтар өсөн үҙегеҙҙе бейетеп китмәй булмаҫ.

*Ағинәйҙәр ҡатыҡ тураһында йыртаҡмаҡ башҡара.*

**Алып барыусы:** Башҡорт халҡында ҡатыҡҡа ҡунаҡ саҡырышыу, ҡатыҡ тәмләшеү, ойомос таратыу йолалары йәшәй.
**Беренсе ағинәй:** Эйе, "Ҡатыҡҡа ҡунаҡ саҡырышыу" булған, булды, әле лә бар!
**Икенсе ағинәй:** "Ҡатыҡ тәмләшеү" булған, булды, әле лә бар. Әлхәмделиллаһ.
**Өсөнсө ағинәй:** "Ойомос таратыу" элек тә булған. Бөгөн дә таратабыҙ.
**Беренсе ағинәй:** Мин һеҙгә балалар менән "Ҡатыҡ тәмләшеү" йолаһын күрһәтәйем әле. Килегеҙ, балаҡайҙар. (Балалар уны уратып ултырыша). Беҙ бәләкәй саҡта, яҙ етһә, йәйге сыуаҡ төшһә, ҡатыҡҡа саҡырыша торғайныҡ. Үҫмер ҡыҙҙар, кесе туғандарыбыҙҙы етәкләп, матур ҡалаҡтарыбыҙҙы алып, сеүәтәләргә ҡатыҡ һалып бергә йыйылабыҙ. Күберәк һыу буйына барабыҙ. Таҙа ҡырсында йәки сирәмле яр башында түңәрәкләп ултырабыҙ. Берәү башлай. Ҡалағын туҡылдатып үҙенең сеүәтәһенең сите буйлап туҡолдатып "йөрөтә", йәнәһе, ҡунаҡ саҡырырға сыға. Уға ҡаршы башҡа балалар ҡалаҡтарын торғоҙоп, үҙҙәренең сеүәтәләре янында көтә. Саҡырыусы ҡалағы менән башҡа сеүәтәләргә туҡылдата.

- Өйҙәләрме?
- Өйҙә!
- Ҡунаҡҡа саҡырам... Апайынды алып кил, фәлән энеңде алып кил...
- Ярай, рәхмәт, килербеҙ....

Ҡүмәкләшеп саҡырыусының ҡатығын ашап бөтәбеҙ. Шунан уйнап алабыҙ ҙа икенсе саҡырыусының ҡатығын ашайбыҙ. Шулайтып бөтә ҡатыҡтарҙы ла тәмләп сығабыҙ. Ҙур балалар ҙа, кеселәре лә туйып-уйнап ҡайта. Әсәйҙәребеҙ беҙгә ҡатыҡты ҡаймаҡлап, еләк-емеш өҫтәп, тәмләтеп ебәрә торғайны.
**Икенсе ағинәй:** Мин балаларға иң файҙалы булған ойотҡанды һөйләйем әле. Бына ул. Ҡарағат япрағы һәм емеше ҡушылған ҡатыҡ. Ҡуйы һөттән ойотолған ҡатыҡҡа йәш ҡарағат япраҡтары һалына. Ҡарағат ҡайнатмаһы йәки туңдырылған емештәрҙе лә һалырға мөмкин. Бик үҙенсәлекле ҡарағат тәме сыға торған ҡатыҡ килеп сыға. Һыуһынға килешә, витаминлы була.

*Ҡүмәкләшеп тәмләйҙәр.*

**Беренсе ағинәй:** Ҡурайсыбыҙ ни хәлдә? Ҡурайын тарта аламы?
**Икенсе ағинәй:** Тағы саҡ ҡына шеше ҡайтһын әле, көтәйек бер аҙ.
**Алып барыусы:** Улайһа, ойотҡан серҙәрен сисә торайыҡ. Иң оҫта хужабикәне нисек маҡтайҙар? Эйе, ҡулының ҡото бар, тиҙәр. Ә шулай ҙа ҡатыҡ тәме ниҙә?
**Беренсе ағинәй:** Беренсенән, һөт ағас йәки ҡалай биҙрәгә һауылырға тейеш. Йәки эмалле күнәккә. Цинк менән ҡапланған биҙрәгә һауылған һөттән яҡшы ҡатыҡ булмай. Биҙрәнең бик таҙа булыуы мотлаҡ.
**Икенсе ағинәй:** Һөттө һауып ингәс тә тиҙ генә эмаль һауытҡа, быяла йә керамик һауытҡа һөҙөп алып ҡуям.
**Өсөнсө ағинәй:** Минеңсә, һөттө һауғас та сепаратор аша үткәрергә кәрәк. Йыйып айыртылған һөттөң ҡаймағы аҙ сыға, ҡатығы ла яҡшы булмай.
**Беренсе ағинәй:** Ә мин былайтам: ҡатыҡ өсөн һөттө суйын ҡаҙанда ҡайнатыу яҡшы, һис юғы ҡалын алюмин кәстрүл ярай. Эмаль һауытта ҡайнатһаң, һөт күмһей, көйә. Һөттө талғын утта болғата-болғата оҙаҡ ҡайнатырға кәрәк. Артыҡ һыуы парға оса, ҡатыҡ ҡуйы була.
**Икенсе ағинәй:** Шулай, артабан иң ҡыҙығы башлана! Ҡайнаған һөттө ағас батманға йәки эмаль кәстрүлгә һөҙөп алабыҙ. Алюмин кәстрүлдә ойоған ҡатыҡ тәмен юғалта. Шулай уҡ һөҙөп алғандан һуң ҡайнаған һөт таҫтамал менәнябып һыуытыла.
**Өсөнсө ағинәй:** Дөрөҫ, һөт йылымыс ҡына булып ҡалғас, уға ойомос һалабыҙ. Өс литрҙай һөткә бер стакан самаһы әсе ҡатыҡ ойомосо ҡушып, әкрен генә болғатыла. Өҫтөнә таҫтамал ҡаплап, йылы урынға ҡуйыла, ҡатыҡ ойоғансы урынынан ҡуҙғатырға ярамай. Шулай уҡ ҡатыҡ ойоған һауытты ҡапҡас менән ныҡ итеп япһаң, ҡатыҡ тәмһеҙ була. Ҡапҡасты ҡырын ябып, өҫтән таҫтамал менән бөркәп кенә ойоторға кәрәк.
**Беренсе ағинәй:** Ойотҡан яһай беләбеҙ, тимәк, ҡатыҡ тәмләшеү йолаһы йәшәй әле!
**Алып барыусы:** Бына тигән йола ул! Рәхмәт, иң оҫта ҡатыҡ ойотоусылар серҙәрен йәлләмәй бүлеште, ҡатыҡ менән дә һыйланы. Башҡорт халҡының иң билдәле милли аштарының береһе - ҡатыҡ. Йәки икенсе төрлө әйткәндә, ойотҡан. Шул ойотҡан-ҡатыҡтан ҡорот, һөҙмә, эремсек эшләнә. Тәмле ҡатыҡтан эшләнгәне, әлбиттә, тәмле була. Ҡатыҡ тәмләү йолаһы бер ҙә юҡҡа үткәрелмәй.
**Икенсе ағинәй:** Шулай булмай ни!

*Умартасы инә.*

**Умартасы:** Эй һеҙ, уйын батшалары, йола белгестәре, ойотҡанға бал һалып болғап ашаһағыҙ, һеҙҙән дә шәп кешеләр булмай. Мәгеҙ, бал болғағыҙ. Телегеҙҙе йотмағыҙ. *(Ҡатыҡҡа бал болғап ашайҙар).* Ҡурайсыбыҙ ҙа һә тигәнсе төҙәлер. *(Ҡурайсыға баллы ҡатыҡ ҡаптыралар).*
**Беренсе ағинәй:** Әһә! Баллы ҡатыҡ килеште. Ҡурайсыбыҙ көй һайлай башланы...
**Алып барыусы:** Туҡта, тәүҙә ҡатыҡ һыулап ҡына айран эсеп алайыҡ. Ҡатыҡ тәмләшә торғас, һыуһатты! (Айран ҡойоп эсәләр).

*Ҡурайсы ҡурай уйнай. Йыр-бейеү башлана.*

**Кинйә МӘЗИТ**
**яҙып алды.**

**✓ Хөкүмәт эшендә эшләп, тормош һабаҡтары алған, дөйөм тәртип ҡағиҙәләренә күнгән, аҡыл туплаған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ был йәмғиәт эшен бер ҡайҙан бойороҡ йә күрһәтмә көтмәй, үҙ теләктәре менән башҡара.**



ИНТЕРНЕТТАН



# КҮҘҘӘРЕҢДЕ ҺАҠЛА!

■ Эшкә бар күңелең менән бирелеү шәхси тормошҡа насар йоғонто яһай, тип уйлаусылар хаталана. Швейцария тикшеренеүселәре Швейцарияла һәм Германияла йәшәгән 285 ғаилә парын тикшергән һәм бының дөрөҫ түгеллеген дәлилләгән. Ғалимдар билдәләүенсә, кем күп эшләй, улар буш ваҡыттарын ғаиләһенә арнай. Шуға ла бындай ғаиләләрҙә ир менән ҡатын бер-береһенән ҡәнәғәт була. Женева университетында үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, ғаилә мөнәсәбәттәрендәге көсөргәнеш бала тыуғас барлыҡҡа килә. Кемдәндер ауырып китеүе мөнәсәбәттәргә бер ниндәй ҙә йоғонто яһамай. Ғалимдар билдәләүенсә, хаҡлы ялға сығыу өлкәнәйгән ғаилә парҙарын тағы ла яҡынайта төшә.

■ Организмды Тибет ламалары алымы буйынса зыянлы матдәләрҙән таҙартыу өсөн үҙеңә нисә йәш, шунса ҡалаҡ дөгө ярмаһын һанап һалып йыуырға. Таҙартылған ярманы банкаға һалып, өҫтөнә ҡайнаған йылы һыу ҡойоп, ҡапҡас менән ябып ултыртып ҡуйырға. Иртәнсәк дөгөнөң һыуын түгеп, ярманы бер ҡалаҡҡа өйөмә итеп алып, тоҙ һалмайынса, 3-4 минут тирәһе бешерергә. Был дөгөнө сәғәт иртәнге һигеҙенсе яртынан алда ас ҡарынға ашағандан һуң, өс сәғәт бер нәмә лә ашамай һәм эсмәй торорға кәрәк. Банкала ҡалған ебетелгән ярмаға тағы ла ҡайнаған йылы һыу ҡойоп, һыуытҡысҡа ҡуйырға. Дөгө бөткәнсе көн дә ошо процедураны ҡабатларға. Был ысулдың сере шунда: дөгө орлоғоноң структураһы кристалл, уны ебетергә һалғанда крахмалы сығып бөтә һәм буш күҙәнәктәр ҡала. Бындай дөгө адсорбент кеүек эшләй һәм ошо рәүешле дауаланыу курсы үтеүсенең сәләмәтлеген яҡшы нығыта, кешене йәшәртә, бил ауыртыуы, муйын шытырлауы бөтә.

■ Америка Йәмғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үҫмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үҫмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үҫмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

■ Америка тикшеренеүселәре әйтеүенсә, эш ваҡытында килеп тыуған көсөргәнештән эш өҫтәле янынан китмәй генә ҡотолорға була. Бының өсөн улар өс ысул тәҡдим итә. Беренсеһе - өҫтәл тартмаһына фисташка, кешью, миндаль һәм грек сәтләүеге һалып ҡуйығыҙ. Был сәтләүектәр стресты еңеләйтеү көсөнә эйә. Уларҙың составындағы витаминдар, аминокислоталар һәм антиоксиданттар стресс гормоны кортизол тәьҫирен баҫып, бәхет гормоны - серотонин буленеп сығырға ярҙам итә. Икенсе ысул - акупунктур массаж. Белгестәр нервыларҙы тынысландырыу өсөн ҡолаҡ япраҡтарына массаж яһарға тәҡдим итә. Массаж мәлендә ҡолаҡта урынлашҡан биологик әүҙем нөктәләргә яһалған баҫым организмдағы бөтөн процестарҙы яйға һала, эске ағзалар эшмәкәрлеге яҡшыра, кәйеф күтәрелә. Бер сынаяҡ ҡара сәй ҙә нервыларҙы тәртипкә килтерергә булышлыҡ итер. Был эсемлектә файҙалы матдәләр һәм антиоксиданттар бик күп. Шуға ла сәй эсеүгә өс-дүрт минут ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ҠУНАҠ АШЫ - ҠАРА-ҠАРШЫ

**Районыбыҙҙа ағинәйҙәр хәрәкәте барлыҡҡа килеп, әлеге кимәленә еткәненә тиҫтәгә яҡын йыл үтеп тә киткән. Ошо дәүерҙә ауылдарға сығып, ҡорҙар ойоштороп та, эшләп китмәгәндәре, эшләй бирип тарҡалып ҡуйғандары ла бар. Ҡыуанысҡа күрә, фәһем алырлыҡ эштәре менән башҡаларға һәр даим өлгө итеп ҡуйырлыҡтары ла етерлек улар араһында!**

Был төрлөлөктөң сәбәбенә төшөнөр өсөн еңелсә генә иҫәп-хисап биреп ҡараһаң, һәр ҡайһыһының да нигеҙендә кеше факторы ята. Етәксе итеп һайлап ҡуйғандың холҡонда үҙенен ҡул аҫтындағылары өсөн эске яуаплылыҡ, ихласлыҡ, фиҙаҡәрлек, ныҡышмалылыҡ, талапсанлыҡ кеүек сифаттары булыу өҫтөнә, ауыл хакимиәте башлығы, мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре тарафынан иғтибар күрһәтелһә, эштәр яйға һалынып, ауыл тормошонда ыңғай һөҙөмтәләр күҙгә ташланырға ғына тора. Сөнки совет осоронда һәр саҡ хөкүмәт эшендә эшләп, тормош һабаҡтары алған, дөйөм тәртип ҡағиҙәләренә күнгән, сабыр аҡыл туплаған олпат ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ был йәмғиәт эшен бер ҡайҙан бойороҡ йә күрһәтмә көтмәй, үҙ теләктәре менән башҡара. Сараларҙа ла кем алдындалыр хисап бирер, күҙ буяр өсөн генә ҡатнашыу ят уларға. Ауылдарҙа мәсеттәр төҙөлөп, урындағы хәҙрәттәребеҙгә халыҡты йәлеп итеп эш башлап китер өсөн дә ағинәйҙәрҙең ярҙамы баһалап бөткөһөҙ. Үҙ уставы булған йәмғәт ойошмаһының эске тәртибенә, талаптарына буйһонған ағинәйҙәр, ысынлап та, үҙтәрбиә аша күркәм тышҡы ҡиәфәт, олпатлыҡҡа өлгәшеп, әүҙемлектәре менән өлгө күрһәтеп, ауылдаштары араһында ихтирам яулай. Шундай ҡорҙарҙың береһе - Ғәлиәкбәр ағинәйҙәре тураһында булыр һүҙем.

Апрель айында Яңы Мөсәт ағинәйҙәренең саҡырыуын ҡабул итеп, ҡар



БАҠСА

# МУЛ УҢЫШ АЛЫРҒА ТЕЛӘҺӘГЕҘ...



**Йәшелсә, емеш-еләк ағастары һәм ҡыуаҡтарын үҫтереү, уларҙан мул уңыш алыу һауа торошонан, ваҡытында һыу һибеп, утап тороуҙан тыш, фәнни ҡараш та талап итә. Баҡсасылар июндә ниндәй эштәрҙе мотлаҡ башҡарырға тейеш? Ошо һорау менән һәүәҫкәр баҡсасы Рәшиҙә Арыҫланбәковаға мөрәжәғәт иттек.**

- Эйе, дөрөҫ, сәскән, ултыртҡан йәшелсәләрҙән, емеш ағастарынан мул уңыш алыу баҡсасынан уңғанлыҡ ҡына түгел, ә баҡсасылыҡ тураһында белем һәм тәжрибә лә талап итә. Бына, мәҫәлән, күптәр май айында ҡыҙыуҡыҙыу эшләп, барыһын ултыртып бөтә лә, июндә бөтөнләй дилбегәһен бушата. Тап ошо ваҡытта сүп үләндәре, уныһынан да бигерәк төрлө ҡорт-фәлән баҫып ала башлай. Шуға күрә, ултыртып бөттөм дә, эш бөттө тип, артыҡ үҙегеҙгә ял бирергә ярамай. Өҫтәүенә йылы һәм дым тиҙ генә төрлө инфекция сығанағы булған микроорганизмдар барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Шунын өсөн ваҡытында тейешле саралар күреү мөһим.

Әгәр яҙ көнө емеш ҡыуаҡтарындағы туңған, һынған ботаҡтарҙы ҡырҡырға форсатығыҙ булмаһа, иң ҡулай мәл етте. Йәш үсентеләрен ҡалдырып, ҡороғандарын киҫеп алығыҙ. Уларҙы күбәйтергә уйлаһағыҙ, сыбыҡса ялғап үҫтерегеҙ, был ысул емеш ҡыуағын үрсетеүҙең иң ябайы.

Ҡурай еләге 1 метр бейеклеккә етһә, ботаҡланып үҫһен өсөн осон ҡырҡырға онотмағыҙ. Шулай иткәндә, ул август буйы емеш бирә ала, еләге лә эрерәк була. Шулай уҡ тиреҫ менән ашлау яҡшы һөҙөмтә бирә. Уны 1 квадрат метрға 2-3 килограм нисбәтендә һалығыҙ. Сабылған йәки йолҡонған сүп үләне лә - бына тигән ашлама. Ҡурай еләге ҡоролоҡто ла, артыҡ дымды ла яратмай. Һыу күп булһа, ул серей, бәҫәрә башлай. Унан ҡотолоу өсөн ҡыуаҡ тирәләй көл һибегеҙ, ә япрағын Фитоспорин, Циркон менән эшкәртегеҙ.

Июндә ҡырау булыуы ла мөмкин. Шуға күрә һыуыҡ төндә ҡаршы алырға әҙер булығыҙ. Йыш ҡына баҡсасылар йәшелсә үрсетмәләрен генә ҡаплай, ғәмәлдә, емеш ҡыуаҡтары ла һыуыҡҡа бирешеүсән. Яба торған материалдарығыҙ етмәһә, һалҡын һыу һибегеҙ, был алым да ҡыуаҡтарҙы ҡыраузан һаҡлай.

Шулай уҡ ҡороҡтостарға ҡаршы көрәшергә онотмағыҙ. Алма, груша, ҡарағат, крыжовниктарығыҙҙы ентекләп ҡарағыҙ: үрмәксе ауы, йомарланған япраҡтар, төрлө бөжәктәр йоморҡталары юҡмы? Булһа, таҙартығыҙ. Бөшмәк ауырыуын иҫкәртеү өсөн ағас-ҡыуаҡтарҙы 1 процентлы бор шыйыҡсаһы менән эшкәртегеҙ.

Йәш баҡсасыларҙың иғтибарын тағы шуға йәлеп иткем килә: йәй башында ағас-ҡыуаҡтарға мотлаҡ һыу һибергә кәрәк. Һибер алдынан төбөн йомшартығыҙ, мульча һалығыҙ. Был процедуралар шулай уҡ сүп үләне үҫеүенән, ерҙең ныҡ кибеүенән дә һаҡлай. Емеш ҡыуаҡтарына һәм ағастарына сәскә атҡан ваҡытта айырыуса һыу күп кәрәк. Шулай уҡ еләктәре эреләнгән мәлдә лә һыу һибергә онотмағыҙ.

Прививкаға ла етди иғтибар бирергә кәрәк. Әгәр яҙ көнө эшләнгән булһа, хәҙер уны дөрөҫ тәрбиәләү мөһим. Ҡыуаҡты ентекләп ҡарағыҙ, үҫеп китә алмағандарын алып ташлағыҙ, юғиһә, үҫемлектең көсөн алып ултырасаҡ. Прививка урынынан аҫтараҡ барлыҡҡа килгән үҫентеләрҙе ҡырҡып алығыҙ. Йәш үрендә йәки шытым тиҙ оҙонайып китһә, осон семтеп өҙөп алығыҙ. Прививкаға бәйле июндә тағы бер проблема булыуы ихтимал. Бәйләгән йәки беркеткән урын тиҙ үҫһә йәки йыуанайһа, ҡалынайған урынға тиклем ҡайырын киҫегеҙ, ә прививка урынын пленка менән бәйләгеҙ.

Был эштәрҙең бер ниндәй ауырлығы юҡ. Барыһын да бер системаға һалып башҡарырға ғына кәрәк. Бер өйрәнеп алһаң, хатта төрлө эксперименттар эшләге килә. Иң мөһиме, мәлде ҡулдан ысҡындырмағыҙ, сөнки йыл да тиерлек емеш ағастары, ҡыуаҡтар бер үк ваҡытта сәскәгә тумалана, уны ҡоя, емешләнә. Үҙегеҙсә баҡсасы календары алып барһағыҙ, тағы ла яҡшыраҡ.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

✓ **"Әй, Ғайса, әгәр Мөхәммәт өммәтенән булған берәй кеше шәғбан айының ун бишенсе кисенә ирешеп, шул кистә уяу тороп, намаҙ уҡыһа - минең алдымда был шәйехтән дә артығыраҡ булыр".**

һыуына барыу йолаһында ҡатнашып ҡайтҡан ғәлиәкбәрҙәр, оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай, яҙғы эштәр, ураҙа тотоу араһында әҙерләнеп, ошо көндәрҙә ут күршеләрен саҡырып, бик матур сара ойошторҙо. Ҡунаҡтар килеүгә ауыл мәҙәниәт йорто сынъяһау ҡораматуй күргәҙмәһе менән биҙәлгән ине. Әлбиттә, был бер айлыҡ ҡына эш һөҙөмтәһе түгел. Районда ағинәйҙәр ҡоро ойоша башлағандан алып, ошо шөғөлдә ныҡлап тергеҙеүгә тотонған оҫталар йәшәй был ауылда. Етәкселәре Сәриә Минһажева улар өсөн оҫталыҡ дәрестәрен ойоштороуы өҫтөнә, район үҙәгендәге "Кәрәҙ" клубына килеп, ҡорама серҙәренә төшөнөүҙән дә танау сирманылар улар. Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерлек сиктәрендә үткән "Сергетыш" проектына ла иң әүҙем тотоноп китеүселәр сафында булды Ғәлиәкбәр ағинәйҙәре. Араларында боронғо шөғөлдәрҙе һаҡлаусы, инде 80 йәште ҡыуып килһә лә, заманса яңы эш төрҙәрен өйрәнергә атлығып тороусы Хөснә апай Исламбаева кеүек оҫта булыуы ла мәртәбә уларға. Ултырғыс түшәген сергетышлы итеп тегеп, күргәҙмәгә һалып та ҡуйған өлгөрбикә апайыбыҙ! Ҡулланыу даирәһен арттырыу йәһәтенән, сергетышлы башҡа ҡаралты төрҙәрен уйлап сығарыуға ла тотонғандар булып сыҡты әле улар. Мәҫәлән, уны одеял өҫтөнә япма итеп беркеткәс тә бик килешле: диван-карауат япмаһы итеп ҡулланаһыңмы, әллә ябынып ятаһыңмы - ҡайһылай ҙа ярай. Бына шулай бербереһенә яңынан-яңы идеялар биреп, тәжрибәләре менән уртаҡлашыр, яңылыҡтары менән бүлешер өсөн йыйылыша ла инде ағинәйҙәр! Үҙҙәре булдырған сынъяһау сәхнә кейемдәре, милли биҙәүестәрен кейеп алған хужабикәләр, хакимиәт башлығы Әминә Сабир ҡыҙы Байгазина, мәҙәниәт йорто етәксеһе Илдар Зәки улы Ишмөхәмәтов менән бергәләктә ҡунаҡ ҡаршылау йолаһын еренә еткергәс, байрам кейемендәге барса халыҡ ауыл урамын йәмләп, гармундар уйнап, ауыл көйҙәрен йырлап тауға сыҡты.

Ҡар һыуҙарына туйынып, әлеге мәлгә хас булмаған әҫәгә бирешеп өлгөрмәгән Батша шишмәһе янына килгәс, был мөғжизәгә рәхмәтле булып, ямғыр теләү йолаһын үткәрергә килеште халыҡ. Имам булып мәҙәниәт йорто директоры Илдар Зәки улы Ишмөхәмәтов үҙе торҙо: аҙан ҡысҡырып, ике рәҡәғәтле истиска намаҙын үткәрҙе, ямғыр һорап доғалар ҡылды. Беҙҙең өсөн ерҙе түшәк итеүсегә, күкте көмбәҙ ҡылыусыға һәм күктән һыу төшөрөүсегә, беҙгә ризыҡ булһын өсөн шул һыу менән емештәр үҫтереүсегә - Бер Аллаһҡа маҡтау һәм үтенестәребеҙ барып етһен, тиғән теләктә тауҙан мәҙәниәт йортона кире төштөк.

Әйткәндәй, берлектәр нимәгәләр өйрәнергә ҡул ҡаушырып, ауыҙ асып ҡына килмәгән булып сыҡты. Инде алты йыл буйына Ғилминур Уразаева етәкселегендә ныҡлы ойошҡан, бар яҡтан булдыҡлы был коллектив Гүзәл Ҡасҡынбаева ярҙамында ыҡсым ғына йырлы-бейеүле сығыш әҙерләгән һәм бик матур ҡабул ителде.

Ә инде сараның хужалары "Ҡыҙ бирнәһе әҙерләү" йолаһын сығарҙы сәхнәгә. Үсмер генә ҡыҙ бала Илзидә Харрасованың нәзәкәтле бейеүе фани донъялыҡта ғүмерҙең тиҙ генә үтеп барыусы бер осор икәненә, шуға күрә уның һәр бер мәленең ҡәҙерен белеп, халҡың өсөн иҫтәлекле матур эштәр менән биҙәргә тейешлеккә ишара ине. Бик фәһемле, көнөндә кәрәкле теманы асып һалды һәүәскәр артистәр! Ғәлиәкбәр ағинәйҙәрен бөгөн тот та ошо сығышы менән туйға саҡыр! Йәш ғаиләгә донъя көтөп алып китер өсөн үҙебеҙҙең милли үҙенсәлекле ҡаралты төрҙәре ни тиклем бай һәм күренекле икән, тип һоҡланып ултырҙы ҡунаҡтар. Күңел йылыһы, күҙ нурҙары һалып, ҡулдан әҙерләнгән, өйгә ҡот килтерә торған тормош-көнкүреш өсөн яраҡлы әйберҙең баһаһы төшөп, заманса магазин әйберҙәренә һалышып бөттө шул хәҙер халыҡ...

Хәҙер алдынғы ҡарашлы күп йәштәр туйҙарын ошондай сығыштар яһаусы фольклор коллективтары менән үткәрә лә инде. Сәриә Минһажева, Хөснә апай Исламбаева, Ғәзимә Байгазина, Әнисә Ишмөхәмәтова, Хәшиә Ғәлиева, Гөлдәр Яманаева, Ғәлимә Әминева, Фәнүзә Ғәбитова, Гөлдәр Әхмәтовалар әҙерләгән бирнәлектә һуғылған балаҫ, сигелгән таҫтамалдар, алъяпҡыстар һәм ҡулъяулыҡтар, ҡорама түшәк һәм юрғандар, сергетыш, селтәрле мендәрҙәр күҙҙең яуын ала ине. Бына бит ул өлгөлө ҡатын-ҡыҙҙар ниндәй була: йолаларҙы тергеҙеп, милли ғөрөфғәҙәттәребеҙгә йән өрөп, быуындар араһындағы күсәгилешлекте тәьмин итеүселәр улар!

Байрам табынын да тәрбиәүи маҡсатҡа ярашлы ҡорҙо хужалар. Ошо сараға махсус саҡырылған Байназар ауылы ҡунағы Көнһылыу Зәки ҡыҙы Ҡотлобаеваны ауылдың почетлы ағинәйе итеп ҙурлап, башына аҡ яулыҡ яптылар. Милләт өсөн файҙалы эштәре районда ғына түгел, республика кимәлендә билдәле ауылдаштары менән хаҡлы ғорурлана ғәлиәкбәрҙәр! Туған телебеҙҙе донъя кимәлендә танытыусы һәм һаҡлауға булышлыҡ итеүсе, Башҡорт википедияһында арымай-талмай хеҙмәт итеүсе Көнһылыу ханым ауылдаштары араһында ла ошо яуаплы эште үҙ иҥенә алырға теләүселәрҙе өйрәтергә һәр саҡ әҙер.

Ошондай маҡсаттар менән күңел ҡушыуы буйынса, бушлай, ауылы, ауылдаштары, милләте, халҡы өсөн фиҙаҡәр хеҙмәт итеүсе абруйлы ағинәйҙәрҙең әүҙемлектәрен файҙаға ғына ҡуллана белгән, ҡәҙерләгән ауыл хакимиәте етәкселәре, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре бөтә ауылдарҙа ла булһа ине, тиғән теләк менән таралышты ҡунаҡтар.

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫС ТӘРБИӘЛӘ

Күптәр ыңғай фекерләүҙе реаль түгел тип иҫәпләй, йәнәһе, ошо рәүешле фекерләүсе проблемаларҙан, фажиғәләрҙән һәм өмөтһөҙлөктән ҡасырға теләй. Ләкин эш унда түгел.

Ыңғай фекерләү үҙ проблемаларыңа һәм кешелек проблемаларына мөнәсәбәтте билдәләй, шулай уҡ конструктив ғәмәлдәр ярҙамында уларҙы хәл итеүгә булышлыҡ итә.

Ыңғай фекерләү кешегә үҙ көсөн туплап, йомшаҡлыҡтарын һәм сикләүҙәрҙе еңеп сығырға ярҙам итә. Ул һинә бөйөк эштәр өсөн тыуыуыңды аңларға ярҙам итә, эсеңдәге Ыңғай Көс һәр хыялыңды тормошҡа ашыра ала. Ул фекерендә тик ыңғайға көйләргә һәм төп иғтибарыңды үҙ-үҙең, донъя һәм кешеләр менән килешеп йәшәүгә йүнәлтергә ярҙам итә.

Яҡшыға өмөтләнеп, һин тормошоңа ыңғай яҡтарҙы йәлеп итеүсе тартыу көсөн барлыҡҡа килтерәһең. Тик бер нәмәне аңларға кәрәк: ыңғай фекерләү ыңғай ғәмәлдәргә алып килмәһә, ул файҙаһыҙ.

Телмәреңдең характеры тойғоларыңа, кәйефеңә, үҙ-үҙеңә ышанысыңа һәм реаль тормош тәжрибәңә көслө йоғонто яһай. Бынан алда беҙ кире раҫлауҙар кешене уңышһыҙлыҡҡа, төшөнкөлөккә һәм төрлө ауырыуҙарға көйләүе хаҡында һөйләгәйнек инде. Ә бының дөрөҫ сиселешен нисек табырға һуң? Ул артыҡ ҡатмарлы ла түгел - процесты икенсе яҡҡа йүнәлтергә кәрәк.

Үҙең дөрөҫ тип тапҡан нәмәләрҙең исемлеген төҙө һәм шуға йыш ҡына күҙ һал, хатта ятлап алырға ла мөмкин. Иғтибарыңды үҙ өҫтөнлөктәреңә һәм яҡшы сифаттарыңа тупла ла, үҙеңдең лайыҡлы, һәр яҡлап үҫешкән, уникаль кеше булыуыңа эске инаныу уят. Нимәнелер дөрөҫ эшләһәң, үҙеңә был турала иҫкәртеп торорға онотма, хатта үҙеңде бүләклә. Шулай итеп, һин үҙең өсөн дөрөҫ тип тапҡан нәмәгә йүнәлтелгән яңы тәртип схемаһы эшкәртерһең.

Ыңғай аҡыл төҙөлөшөң үҫеүгә һәм уның ыңғай ғәмәлдәрҙә тормошҡа ашыуына ҡарап, яңы "мин"ең, уңышҡа өлгәшә белеүсе "шәхесең" үҫешә башлаясаҡ. Көскә һәм маҡсатҡа ынтылышлыҡҡа әйә булырһың. Үҙеңде тотҡарлап торған бөтә ялған инаныуҙарҙы енеп сығырһың, үҙеңде бер ваҡытта ла янғыҙ тоймаҫһың. Буштан-юҡҡа үҙеңде һәм башҡаларҙы ғәйепләмәҫһең. Асыҡ сырайлы, эскерһеҙ булырһың. Һаулығың нығыныр һәм оҙаҡ йәшәрһең. Яңы рухи аң даирәң үҫешер. Үҙеңде һәм башҡаларҙы элеккегә ҡарағанда тәрәнерәк яратырға өйрәнерһең. Былар барыһы ла һинең яңы "мин"еңдең асылы.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР*

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

### Шәғбандың ун бишенсе кисе

Ғайса ғәләйһиссәләм сәйәхәт ҡылып йөрөгән ваҡытында юл ҡырында ятҡан бер ташты күреп ҡала. Ул таштың өҫтөндә һөттән дә ағыраҡ икенсе таш ята икән. Был күренештән ғәжәпкә ҡалып торһа, Аллаһы Тәғәләнән тауыш килгән, ти: "Әй, Ғайса, бынан да ғәжәберәк нәмә күрергә теләйһеңме?" Уныһы: "Яраббым, бик теләйем", - тип әйтеүе була, шунда уҡ аҡ таш ярылып та китә. Ҡараһа, уның эсендә бер ҡарт әҙәм ултыра, ти. Йөнйән һуғылған сәкмәне, ҡулында йәшел таяғы бар, алдында йөҙөм емеше үҫеп ултыра, ә үҙе намаҙ уҡый, имеш. Ғайса ғәләйһиссәләм был хәлгә ғәжәпкә ҡалып: "Әй, шәйех, был урында күптән ғибәҙәт ҡылаһыңмы?" - тип һорағас, шәйех: "Дүрт йөҙ йылдан ашыу ғибәҙәт ҡылам", - тип яуаплай. Бынан һуң Ғайса ғәләйһиссәләм: "Яраббым, әй хужам, донъяға бынан да артыҡ, бынан да изге кешене яраҡлтмаҫһың!" - тип ғәжәпләнгән. Шул саҡ Аллаһы Тәғәләнән уның күңеленә: "Әй, Ғайса, әгәр Мөхәммәт өммәтенән булған берәй кеше шәғбан айының ун бишенсе кисенә ирешеп, шул кистә уяу тороп, намаҙ уҡыһа - минең алдымда был шәйехтән дә артығыраҡ булыр", - тигән фекер ингән. Шунан һуң Ғайса ғәләйһиссәләм: "Яраббым, мин дә Мөхәммәт өммәтенән булам!", - тигән, ти.

### Төрлө хөкөмдәр тураһында

Ибраһим ғәләйһиссәләм заманында ниндәй ҙә булһа дәғүәне хөкөм итеү ут ярҙамында башҡарылған. Хаҡлыҡ үҙендә булған кеше ҡулын утҡа тыҡһа - янмаҫ, ялғансы кеше тыҡһа - яныр булған. Муса ғәләйһиссәләм заманында хөкөм иһә таяҡ менән: ул хаҡлыҡ үҙ яғында булған әҙәм алдында тик торор, ә ялғансы әҙәм янында һелкенер булған. Дауыт ғәләйһиссәләм заманында хөкөм сылбыр менән: эше хаҡ булған кеше әлеге сылбырҙы тота алыр, ялғансы кеше тота алмаҫ булған. Сөләймән ғәләйһиссәләм заманында хөкөм ел менән: хаҡлыҡ үҙендә булған кешегә һис нәмә юҡ, ә ялғансы әҙәмде күтәреп ташлар булған. Зөлҡәрнәй (Александр Македонский) заманында хөкөм һыу менән булған: эше хаҡ булған кеше әлеге һыуға ултырһа - һыу туңған, ялған кеше ултырһа - ирер булған. Рәсүлебеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләм осоронда өммәт менән ҡылдырмыш хөкөм - ул йыйын йәки шаһит менән бәйле булған. Был иһә юғарыла әйтелгән хөкөмдәрҙең һәр ҡайһыһынан яҡшыраҡ һәм еңелерәк булған. Шунлыҡтан, Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәт өммәтенә: "Әй, Мөхәммәт өммәте, Аллаһы Тәғәлә һеҙгә еңеллек бирә, әммә ауырлыҡты бирмәй", - тигән.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 5 ИЮНЬ - ХАЛЫҠ-АРА ҺЫУ ЯТҠЫЛЫҠТАРЫН ТАҘАРТЫУ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**21-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Антоним. Йопар. Өйрәк. Сара. Әсетке. Һайыҫҡан. Кипр. Өкө. Сутана. Десна. Ҡарға. Бөркөт. Тумыртҡа. Ҡарлуғас. Йома. Утар. Мышы. Лапы. Ағас. Ыҙма.

**Вертикаль буйынса:** Һандуғас. Сыйырсыҡ. Аҡтар. Ҡасҡын. Лампас. Ҡом. Төйләгән. Фа. Ауылсы. Рәт. Тост. Мәрәкә. Көс. Батыр. Ыҙа. Тартай. Торна. Елена. Тана.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЙҮГЕРЕГЕҘ!



**Уҙған ялдарҙа Өфөлә еңел атлетика буйынса "ЗаБег" Бөтә Рәсәй ярым марафоны уҙҙы. Бишенсе тапҡыр уҙғарылған марафонда Рәсәйҙең 85 ҡалаһынан еңел атлетиканы яратыусылар ҡатнашты. Өфөнөң үҙәк урамдары буйлап йүгереп уҙыусылар һаны 2 меңдән ашты. Улар араһында 6 йәшлек кескәйҙәрҙән алып 80-де үтеүселәрҙе лә күрергә мөмкин ине. Төрлө оҙонлоҡтағы трассаны уңышлы үтеүселәр үҙҙәренең тәьҫораттары менән бүлеште.**

***Рәмзиә Әхмәҙишина, Өфө ҡалаһы:*** Ошондай күләмле спорт сараларын ифрат яратам. Элегерәк тик ситтән күҙәтеүсе генә булһам, һуңғы ваҡытта ҡатнашыусылар рәтендәмен. Бөгөн 10 саҡрым арауыҡтағы трассаны һайланым һәм уны 56 минут 06 секунд эсендә уҙҙым. Профессиональ спорт менән шөғөлләнмәгән кеше булараҡ был һөҙөмтәне үҙем өсөн яҡшы тип һанайым. Старт һыҙығында торғанда уҡ күңелде тулҡынландырғыс хистәр биләй. Трассала йүгереп барғанда иһә үҙемдең ошондай ҙур спорт байрамында ҡатнаша алыуыма сикһеҙ шатлыҡ тойғолары кисерәм. Шулай уҡ тамашасыларҙың һәр йүгереүсене дәртләндереп, хуплау һүҙҙәре ҡысҡырып тороуҙары тағы ла көс өҫтәне. Ә финиш алдынан икенсе тыным асылып киттеме ни, һуңғы метрҙарҙы бик еңел үтеп, ҡулыма миҙал алдым.

***Тимур Кәримов, Өфө ҡалаһы:*** Миңә 12 йәш һәм мин быйыл беренсе тапҡыр ошондай ҙур спорт ярышында ҡатнаштым. Йүгерергә ятам һәм мөмкинлек булғанда парктарға сығып йүгереп киләм. Мәктәптә уҙғарылған ярыштарҙан да ситтә ҡалмайым һәм һәр ваҡыт призлы урындарҙы яулайым. Бөгөн бер саҡрымға йүгерҙем. Күберәк арауыҡты ла үтә алыр инем, ләкин йәшем буйынса үтмәнем. Киләһе ярыштарҙа мотлаҡ оҙонораҡ трассаны үтергә тырышасаҡмын. Ярыш миңә бик оҡшаны. Старт алдынан профессиональ спортсылар менән бергә күнегеүҙәр эшләү, билдәле шәхестәрҙең сәләмләү һүҙҙәрен ишетеү, йүгерергә теләүселәрҙең бик күп булыуын күреү дәртләндереп ебәрҙе һәм мин бер саҡрымды бер ауырлыҡһыҙ үттем. Йәштәштәремде лә ошондай спорт сараларында әүҙем ҡатнашырға саҡырам, сөнки спорт берләштерә.

***Ғимран Ғаязов, Ҡырмыҫҡалы районы:*** Был ярым марафон үткәрелә башлағандан алып ҡатнашам. Махсус рәүештә Ҡырмыҫҡалынан баш ҡалаға киләм. Быйыл ҡатыным һәм улым да ҡушылды. Улым 20 саҡрымды үтте, беҙ иһә 10 километр йүгерҙек. Беҙҙең өсөн тәүмаҡсат еңеү түгел, ә ошондай ҙур спорт байрамында ҡатнашып, меңәрләгән йүгерек менән бергә Өфө буйлап уҙыу, матур тәьҫораттар менән ҡайтыу. Спорт кешенең кәйефен күтәрә, дәртдарман өҫтәй. Ә минең өсөн спорттың, бигерәк тә йүгереүҙең, тағы ла мөһим үҙенсәлеге бар - йүгереп барғанда башымда ҡайнаған күп төрлө һорау һәм мәсьәләләр сиселеп, үҙ урынына ултыра. Шуға күрә йүгереү минең өсөн зиһенемде таҙартыусы, яңы офоҡтар асыусы, фекерҙәремде бер епкә теҙергә ярҙам итеүсе сара ла ул.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Июнь (Шәүүәл - Зөлҡағиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (26) дүшәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |
| 8 (27) шишәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |
| 9 (28) шаршамбы | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |
| 10 (29) кесе йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |
| 11 (30) йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 12 (1) шәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 13 (2) йәкшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 июнь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро), әкиәт. 11.00 0+
**8 июнь "Амеля"** (А. Балгазина, Н. Крашенинников). 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**10 июнь "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). 19.00 16+
**13 июнь "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**9 июнь "Магия Севера"** концерты менән Яҡутстандан Олена УУТАЙ. 6+

✓ *Ғүмер тулы булһа ғына оҙон ул. Шуға ла уны вакыт менән түгел, ҡылыҡтарың менән үлсә.*

*(Сенека).*



АФАРИН!

# ЗАМАН АУАЗЫ ЯҢҒЫРАНЫ



**Халыҡҡа кәрәк һүҙҙе трибунаға сығып яңғырата алыр шағирҙар араһында ярыш булараҡ башланғыс алған "Йөрәк һүҙе" шиғри бәйгеһе бөгөн шиғыр һөйләүселәр араһындағы ярышҡа ҡайтып ҡалһа ла, был юлы ла халыҡҡа заман ауазын ишеттерә алды.**

Сара дүртенсе тапҡыр ойошторолдо һәм быйыл унда 87 кеше ҡатнашырға теләк белдерһә, уларҙың ун икеһенә генә иң яҡшы шиғыр һөйләүсе титулы өсөн көрәшеү хоҡуғы бирелгән. Тамашаның беренсе өлөшөн ойошторосылар Бөйөк Еңеүгә 75 йыл тулыуға арнағайны. Бар халыҡты зар илатҡан, мең михнәттәр килтергән һуғышты ҡәһәрләгән, вәхшиҙәрҙе фашлаған поэмалар һөйләне ҡатнашыусылар. Тәүге юлдар яңғырағас та, шиғри һүҙгә сарсап килгән тамашасыларҙың керпектәре йәшкә мансылды. Һәр кем үҙенең ғаилә тарихын хәтергә төшөрҙө, миллиондарса йәндәрҙе ҡыйған вәхшәт тураһында уйға сумды. Һәм тамашасылар биш сәғәт тирәһенә ирекһеҙҙән ошо ауыр уйҙар солғанышында ҡалды.

Әйе, биш сәғәт тирәһенә һуҙылды тамаша. Сөнки, нишләптер, һәр шиғыр ятлаусы поэма һөйләү мотлаҡ, тигән инаныста килгән ярышҡа. Ә бит шиғри һүҙҙең ҡиммәте лә, уны башҡарыусының оҫталығы ла куплеттар һаны менән үлсәнмәй. Унан һуң, Еңеү һәм һуғыш темаһына тап килһен өсөн мотлаҡ был ҡот осҡос күренештәрҙе бәйәнләргә лә тимәгән, ә ошо ауырлыҡтарҙы үҙ иңендә татыған яугир-шағирҙарыбыҙҙың ижадына мөрәжәғәт итеү ҙә етер ине. Яу ҡырынан иҫән әйләнеп ҡайтҡан әҙиптәребеҙ ҙә, йәнен аямай алышып, һәләк булғандары ла байтаҡ бит. Әйткәндәй, яугир-шағирҙарҙың ижады безгә илһөйәрлек, Ватан өсөн көрәш, рух ныҡлығы, кешелеклек тураһында яҡшыраҡ та төшөндөрөр ине.

Ҡатнашыусылар һайлаған шиғырҙарҙың йөкмәткеһен телгә алғас, тағы шуны ла әйтеп китмәй булмай: һәр тиерлек сығыш тамашасыла йәлләү тойғоһон уятыуға ҡоролдо. "Йөрәк һүҙе"н ысын шиғриәтте ишетергә теләгән интеллигент милләттәштәр (хатта алыҫ райондарҙан) тамаша ҡылырға килә бит, уларҙың ихтыяжына яуап бирерлек әҫәрҙәр яңғырарға тейеш ине. Тимәк, халыҡта әле исеме танылмаған йондоҙҙарҙы ҡабыҙыу изге гәмәл булһа ла, башҡорт шиғриәтенең метрҙарына тинләшерҙәй замандаш шағирҙар ижадына мөрәжәғәт итеү тәүге талап булырға тейештер.

"Был матур ярышты беренсе тапҡыр залда ултырып тамаша ҡылдым һәм шиғыр ятлаусыларҙың да, замандаш ижадсыларҙың да бөгөнгө йәмғиәт проблемаларына битараф булмауын тойҙом. Шулай ҙа ойоштороусыларҙың иғтибарын шуларға йүнәлтергә теләйем: беренсенән, был тамашаға урыҫ алып барыусыһы кәрәкмәй. Икенсенән, улар менән йәштәрҙе ҡапма-ҡаршы ҡуйып ярыштырыу ҙа бик үк дөрөҫ түгелдер. Ә иң мөһиме, минеңсә, беҙҙең "Йөрәк һүҙе"ндә тик Башҡортостан шағирҙарының һүҙе яңғырарға тейеш. Дүртенсе тапҡыр ойошторолһа ла, башҡорт шағирҙарының әле сәхнәләрҙән һөйләнмәгән шиғырҙары етәрлек, ҡатнашыусылар эҙләнһен", - тип теләк-тәъсораттары менән уртаҡлашты шағирә, журналист Зөһрә Ҡотлогилдина.

Әҙибәнең һүҙҙәрендә лә хаҡлыҡ бар, сөнки "Башҡорт теле - еңеүсе", тибеҙ икән, быны аҡларға кәрәк. Ә шулай ҙа "Йөрәк һүҙе"нең ойоштороусылары һәм баһалама ағзалары үҙҙәренең ғәҙеллек принциптарына тоғролоҡ һаҡлауына тағы бер тапҡыр шаһит булыу ҙа башҡа бөтә вак ҡытыршылыҡтарға күҙ йоморға мәжбүр итте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһенең быйылғы еңеүсеһе тип Күмертау ҡалаһынан Инсаф Йәмилев танылды. Икенсе урынды Стәрлебаш районынан Гөлдәр Хәйбуллина алды, ә өсөнсө урынды Благовар районынан Гөлфирә Әхмәтшина менән Федоровка районынан Хәлисә Багаева бүлеште. "Тамашасы һөйөүе" номинацияһына Күгәрсен районынан Руслан Абдуллин, "Йыл авторы" номинацияһына Әбйәлилдән Әнисә Махийәнова лайыҡ булды.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ИҒТИБАР!

# ЕТЕ ЕГЕТ СЫҒА АЛЫШҠА

**2019 йылда халыҡ кәсептәрен үҫтереү һәм киңерәк таратыу маҡсатында ойошторолған "7 егет" телевизион проекты күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятты. Башҡортостан юлдаш телевидениеһының иң сағыу тапшырыуҙарының береһенә әүерелгән реалити-шоу ҡыҫҡа ваҡытта Башҡортостанда ғына түгел, сит төбәктәрҙә лә танылыу һәм тамашасы һөйөүен яулап өлгөрҙө. Проект йәмғиәттә ир-егеттәр абруйын күтәреү, халыҡ кәсептәрен пропагандалауға йүнәлтелгән.**

Халҡыбыҙҙа "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" тигән мәҡәл киң билдәле. Ысынлап та, хәҙерге заманда үҙен ысын ир-егет тип һанаған кеше нимә эшләй белергә тейеш? Проектта ҡатнашыусылар ике аҙна эсендә халыҡ кәсептәрен өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Реалити-шоу барышында егеттәр ҡортсолоҡ, йылҡысылыҡ, туҙ һыҙырыу, бура бурау, ҡурай һәм ҡумыҙ яһау, бийма баҫыу, сыбыртҡы ишеү, бесән сабыу кеүек кәсептәрҙең серҙәренә төшөнә. Бынан тыш, ҡатнашыусылар үҙҙәрен ғәҙәти булмаған мөхиттә һынап ҡарай: был ниндәйҙер кимәлдә тормош мәктәбе. Егеттәрҙең иң көслөһө һәм етеҙе генә проекттың төп бүләге - башҡорт тоҡомло атҡа эйә була. Беренсе миҙгелдең еңеүсеһе тип Әбйәлил районы егете Салауат Хафизов билдәләнһә, икенсе миҙгелдә уңыш Белореттан Ғәҙел Дәүләтовка йылмайҙы.

Быйыл Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "7 Егет" проектының 3-сө миҙгеле башлана. Әлеге мәлдә тапшырыуҙы ойоштороуға әҙерлек бара. Реалити-шоуҙа ҡатнашыу өсөн кастинг иғлан ителде. Башҡорт теләндә иркен аралашҡан 20 - 28 йәшлек егеттәр проектта үҙ көсөн һынап ҡарай ала. Төшөрөү 12 - 25 июлдә республикабыҙҙың иң гүзәл төбәгендә - Әбйәлил, Белорет, Баймаҡ райондарында үтә.

Тапшырыу "БСТ" һәм "Ҡурай" каналдарында сентябрь айында эфирға сыға. Телевизор ҡараусылар яраткан ҡатнашыусы өсөн телеканалдың рәсми сәхифәһендә ойошторолған онлайн тауыш биреүҙә ҡатнаша ала. Иң күп тауыш йыйған егет "Тамашасылар һөйөүе" номинацияһына лайыҡ була.

Проект еңеүселәрен билдәләү "Егеттәр балы"нда үтә. Шоу-программала реалити-шоуҙың төп геройҙары менән бергә уларҙы төрлө һөнәрҙәргә өйрәткән оҫталар, билдәле йырсылар, сәнғәт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, эшҡыуарҙар ҡатнаша. Программа тамашасыларға Башҡортостан юлдаш телевидениеһында Яңы йыл төнөндә күрһәтеләсәк.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИЗГЕЛЕК - ТУРАЛЫҠТА,

## күркәмлек - холоҡта

Ахмаҡлыҡ эшләргә ҡурҡмаған кеше һаман йәш әле.

**(Петр Капица).**

Ғүмер тулы булһа ғына оҙон ул. Шуға ла уны ваҡыт менән түгел, ҡылыҡтарың менән үлсә.

**(Сенека).**

Мәңгелек ғазаптан ҡотолорға теләһәң, бер кемде лә ғәйепләмә, бер кемгә лә яла яҡма - Хоҙай быны яратмай.

**(Нил Синайский).**

Илай-илай тыуабыҙ, зарлана-зарлана йәшәйбеҙ, донъянан төңөлөп үләбеҙ.

**(Томас Фуллер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше йәйге эҫе көндә яңғыҙы ғына юлдан атлап килә. Яңғыҙы булғанға киңәнә ул, йәнәшендә кеше булһа, ҡурҡыр ине һымаҡ тоя үҙен. Әммә тора-бара эргәһендә кеше юҡлыҡтан ҡурҡа һәм йүгерә башлай. Үҙ аяҡтарының тауышын ишетеп, тағы ла ныҡыраҡ ҡурҡа һәм тағы ла шәберәк йүгерә. Кемдер артынан ҡыуа төшкәндер, тип уйлап, күҙ ҡырыйы менән генә артҡа ҡарай һәм... артынан ҡалмай йүгергән оҙон шәүләне шәйләй. Ни тиклем шәберәк йүгерһә, шәүлә лә уның артынан ҡалмай йүгерә. Үҙенең аҡылдан яҙа барғанын да аңламай ул. Төн етә һәм кеше уның артынан ҡыуыусы юҡлығын шәйләп, туктала. Әммә таңдың тәүге нурҙары менән уның эргәһендә тағы баяғы шәүлә пәйҙә була, кеше тағы йүгереп китә. Артабанғы көндәрҙә кеше баяғы шәүләне ҡыуып еткермәйем, тип, төнөн дә туктамай йүгереүен дауам итә. Аҙаҡ килеп, был кеше үҙ шәүләһенән ҡурҡыуынан тамам аҡылдан яҙа. Ә уны күргән кешеләр, был ниндәйҙер спорт төрө менән шөғөлләнә, тип, артынан һоҡланып ҡарап ҡала. Кемдер артынан сәскә һибә, кемдер ашарға тоттора. Ә кеше йүгерә-йүгерә лә, бер көн килеп йөрәге шартлап йән бирә. Халыҡ уны хөрмәтләп ерләй һәм зыяратты биҙәүсе хеҙмәткәрҙән ҡәбер ташына ниндәй һүҙҙәр яҙырға кәрәклеген һорай. Хеҙмәткәр шулай тип яҙа: "Был ҡәберҙә ғүмер буйы үҙ күләгәһенән ҡурҡып ҡасҡан һәм ғүмерен заяға уҙғарған кеше ерләнгән. Үлем - ул беҙҙең күләгә. Унан ҡасыуҙы дауам итеп, беҙ бер ваҡытта ла туктала һәм уның нимә икәнен белә алмаясаҡбыҙ. Әгәр ҙә был кеше туктаһа, артынан ҡыуыусының ни икәнен белер һәм, моғайын, үҙ-үҙенән көлөр ине. Бер кем дә бер ҡасан да күләгәһенән ҡасып китә алмай. Бер кем дә күләгә менән көрәштә еңә лә алмай. Әммә был күләгә көслөрәк һәм беҙ еңеү яулай алмайбыҙ тигәндә түгел, ә күләгә юҡ икән, еңеү тураһындағы мәсьәлә лә юҡ, тигәнде аңлата. Булмағанды еңеү мөмкин түгел. Бына шуға ла кешеләрҙе үлем еңә: сөнки үлем - ул тормош күләгәһе".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
04 июнь 20 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3400
Заказ - 363/05